ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 декабрь (аҡъюлай) 2019

№51·(885)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бер-беребеҙҙе...**

ишетеп йәшәйек



3

**Беренсе булғанбыҙ...**

беренсе булырға тейешбеҙ



8-9

**Ҡиссаи-Түләк**



10-11

**Йәшмә башлы тауҙар арьяғында**



12-13

**ТВ-программа** 14

***Шул тиклем күрә алмаған дошманың бармы? Булһа, һин уға байлыҡ, тормош ләззәттәре, күңел асыуҙар, сикһеҙ власть телә: күрерһең, ул ошолар арҡаһында һәләк буласаҡ.***

***(Жан Робине).***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Эскеһеҙ байрам итеп буламы?

***Рөстәм ИШМӨХӘМӘТОВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары:*** Яңы йыл каникулдарында алкоголь продукцияһы һатыуҙы сикләү тураһында закон 29 декабрҙә көсөнә инәсәк, тип көтөлә. Закон проекты республика йәмәғәтселегендә киң яҡлау тапты. Төбәк халҡының социаль селтәрҙәрҙә аралашыуы 90 проценты шулай уҡ был башланғысты бер тауыштан хуплауын белдерҙе. Унын кәрәклеге хаҡында медицина экспертттарының аналитик мәғлүмәттәре лә кире ҡаҡҡыһыҙ дәлил булып тора. Улар фекеренсә, алкоголь менән бәйле үлемдәр һаны буйынса ғинуар айы йыл һайын иң беренсе урында килә. Рәсәйҙә яңы йылды байрам иткән ошо ун көн эсендә генә лә алкоголь эсемлектәрҙе самаһыҙ ҡулланыуҙан 20 меңдән ашыу кеше һәләк була. Был һан, тимәк, сағыштырыу өсөн килтергәндә, тотош Шишмә районы халҡы иҫәбенә тиң тип әйтергә мөмкин. 1-3 ғинуарҙағы үлемдәрҙең төп сәбәбе булып алкоголь менән ағыуланыу факты торһа, артабанғы көндәрҙә, 5-7 ғинуарҙа, алкоголь психозы максималь кимәлгә етә һәм был енәйәтселектең бермә-бер артыуына килтерә.

Эскелек менән бәйле енәйәттәр һаны буйынса Башҡортостан Рәсәй субъекттары араһында - беренсе, ә йәш алкоголиктар һаны яғынан бишенсе урында килә. Бындай хәлдә беҙ, республика парламенты, спиртлы эсемлектәр һатыуға сикләүҙәр индереү һәм халыҡтың алкоголь менән ағыуланыу кимәлен кәметеүгә йүнәлтелгән эш алып барырға бурыслы, тип иҫәпләйбеҙ. Дөрөҫ, быйыл ошо йәһәттән күрелгән ҡайһы бер оператив саралар, мәҫәлән, һуңғы ҡыңғырау тантаналарында, һабантуй байрамдарында эскелекте сикләү ниндәйҙер ыңғай һөҙөмтәләрен бирмәй ҡалманы. Ошо көндәрҙә БР Хөкүмәтендә булып үткән оператив кәңәшмәлә республика Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостанда йыл дауамында алкоголдән ағыуланып үлеүселәр һанының элекке күрһәткестәргә ҡарағанда 70 процентҡа кәмеүе тураһында белдерҙе. БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары ла был йүнәлештә эш дауам ителергә тейеш тип иҫәпләй. Эске мәжлестәре урынына ғаилә менән һаулыҡты нығытыуға йүнәлтелгән һәр төрлө мәҙәни һәм спорт-масса сараларында ҡатнашырға, яңы эш аҙнаһын ысын мәғәнәһендә сәләмәт байрам рухы менән яңырып, дәртләнеп ҡаршыларға әҙерләнәйек.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БАШ ҠАЛАМ*

# ЙОРТ ҺАЛҒАНДАР БОҘҘАН...

**Заманыбыҙҙың бөйөк шағирҙарының береһе Рәйес Түләк үҙенең бер шиғырында: "Яҙҙар хәҙер барыбер яҙыраҡ шул, Көҙҙәр хәҙер барыбер көҙөрәк", - тип яҙғайны. Әммә ҡыштар ғына хәҙер ҡышыраҡ түгел икән. Балалар ғына түгел, ололар ҙа көтөп алған Яңы йыл байрамы алдынан баш ҡаланың төрлө майҙандарында ҡуйылған шыршылар һәм боҙ ҡаласыҡтары менән танышырға ниәтләгән сәйәхәтебеҙ шундай һығымталарға этәрҙе.**

Сәфәребеҙҙе республиканың иң төп шыршыһынан - "Торатау" конгресс-холы эргәһендәге Салауат Юлаев майҙанына ҡуйылғанынан башланыҡ. Әлбиттә, төп шыршы булғас, ниндәйҙер әкиәти мөғжизәгә тап булырға өмөтләнеп килһәк тә, әлегә әкиәт килеп етмәгәйне әле. Эйе, шыршы, һүҙ ҙә юҡ, матур, көн яҡтыһы булыуға ҡарамаҫтан, уттары ла төрлө төҫтә янып тора. Нөктәле (пиксельный) шыршы тигәндең ыңғай яғылыр, моғайын. Һырғалаҡтар ҙа бар, әммә ҡыштың ҡышыраҡ булмауы сәбәпле, бында боҙ ҡаласығы тулыһынса эшләнеп бөтмәгән. Килтерелгән шаҡмаҡлы боҙҙар үҙ сиратын көтөп ята. Шулай ҙа, эшләнгән бер нисә һындарға ҡарап, буласаҡ ҡаласыҡты бер аҙ күҙалларға мөмкин. Эш көнө булғанлыҡтан, шыршы эргәһендә кеше юҡ ине. Бары тик буласаҡ әкиәт тыуҙырыусылар, балаларҙың килеүен көтөп моңайған пониҙар, оҙаҡ тороуҙан өшөп урындарында бейеп-бейеп алған уларҙы йөрөтөүсе ҡыҙҙар һәм бәләкәй балаларын алып йөрөгән бер-ике ғаилә пары ғына ниндәйҙер хәрәкәт барлығына ишаралай.

**(Дауамы 5-се биттә).**



12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгә еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ДИН ТАРИХЫН ДА БЕЛЕҮ КӘРӘК

***Фуат СӨЛӘЙМӘНОВ, БДУ-ның Сибай институты доценты, тарих фәндәре кандидаты:*** Башҡортостан һәм башҡорт халҡының тормошонда ҙур урын алған тарихи-мәҙәни нигеҙ - Ислам дине. Ул әхлаҡи тәрбиә биреү генә түгел, белемдең һәм төрлө фәндәрҙең үҫешенә лә сәбәпсе. Монгол-татар яуы осорона ҡәҙәр ижад итеүсе шағирыбыҙ Ҡол Ғәлиҙән алып бөтә билдәле шәхестәребеҙ, яҙыусылар, шағирҙар, дәүләт эшмәкәрҙәре, ғалимдар, хәрбиҙәр мәдрәсәләрҙә белем алған, намаҙҙан айырылмаған. Ғөмүмән, Совет власы урынлашҡанға тиклем, башҡорт халҡы донъя кимәлендә ҙур урын тотҡан Ислам дине нигеҙҙәрендә тәрбиәләнгән (мәғариф, мәҙәниәт, ғилем, фән, медицина, әҙәп, әхлаҡ, гигиена һ.б.), алдынғы милләт булараҡ үҫешә алған.

Әлбиттә, хәҙерге донъяуи мәктәптә саф дини белем биреү мөмкин түгел, ә шулай ҙа законға таянып дин тарихын һәм асылын әхлаҡи нормалар нигеҙе булараҡ аңлатып була һәм кәрәк. Сөнки беҙҙең йәш быуын балалар баҡсаһында һәм мәктәптә тәрбиәләнә, улар эргәһендә боронғо тәрбиә-тәртипте, әҙәпте, халыҡтың милли йолаларын да, дини мәҙәниәтте лә яҡшы белгән һәм шул нигеҙҙә өйрәтә алған әбей-бабайҙар юҡ. Ә белем усаҡтарында сит мәҙәниәткә нигеҙләнгән тәрбиә саралары ҡулланыла, бер ниндәй мәғәнәгә эйә булмаған сит байрамдар (мәҫәлән, "хэллоуин", "изге валентин көнө" һ.б.) көсләп тиерлек тағыла, улар беҙҙең асылды һәм рухи ҡиммәттәрҙе юғалтыуға алып бара. Элек ата-бабалар диндең тарихын яҡшы белеп, уның мәғәни, әхлаҡи, тормошсан ҡағиҙәләренә таянып өйрәткән баланы: алдашма, урлашма, ҡыйырһытма, тәртип боҙма, таҙа бул, иләнде, милләтеңде, телеңде һөй, башҡаларҙы ихтирам ит һ.б. Бөгөн дә беҙ ошондай аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр биргән аҡылға мохтажбыҙ.

Әммә боронҙан килгән дини ҡиммәттәребеҙҙе, белемебеҙҙе халыҡҡа еткереү системаһы әлеге көндә бигүк камил түгел, шул сәбәпле заман елдәре шауҡымына эләгеүселәр ҙә байтаҡ, яҙыҡ юлға баҫыусылар ҙа бар. Шуға ла эште донъяуи белем биреү системаһы сиктәрендә башларға булыр. Бының өсөн Башҡорт дәүләт университетының "Теология" йүнәлешендә белгестәр әҙерләүҙә бюджет урындарын киңәйтергә кәрәк, улар дәүләт структураларында һәм хәүефһеҙлек өлкәһендә генә түгел, мәғарифта ла эшләй алһын. Шулай уҡ республикала эшләп килгән мәдрәсәләрҙе, юғары белемле имамдарҙы ла был эшкә йәлеп итеү мәсьәләһен хәл итеү өлгөргән мәсьәлә булып тора. Ислам диненең тарихы, мәҙәниәте, уның асылы тураһында дөрөҫ мәғлүмәтле булыу һәм яңылыш юлға баҫмай, тик изге ҡанундарға ғына таянып йәшәү халҡыбыҙҙы алға әйҙәп торған көстәрҙең береһе булыр, тормош һынауҙарына бирешмәҫкә, эшһеҙлек, күңел төшөнкөлөгө, суицид, эскелек һәм башҡа төр заман афәттәрен еңеп сығырға, дәүләт кимәленә тиклем күтәрелә барған урлашыу, мутлашыуҙан котолорға, башҡорт милләтенең рухи көсөн, сәләмәтлеген, әхлаҡлығын һаҡлап ҡалырға ярҙам итер.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *Эскеһеҙ байрам итеп буламы?*



**(Башы 1-се биттә).**

***Юнир ВӘЛИЕВ, табип-гастроэнтеролог:*** 54 йыл өҙлөкһөҙ халыҡ һаулығы һағында эшләгән табип булараҡ, яҡшы беләм: эске мәжлестәренең бер ваҡытта ла йүнлегә алып килгәне булманы. Хатта ул йылына бер тапҡыр килә торған Яңы йыл мәжлесе булған хәлдә лә. Әйткәндәй, үҙ һаулыҡтарына битараф кешеләрҙе тап ошо оҙайлы байрамдарҙа күнелһеҙ хәлдәр ихтималлығы һағалай ҙа инде. Беренсенән, халыҡ байрамды мотлаҡ өҫтәлендә теҙелеп торған араҡы, шарап шешәләре менән ҡаршыларға кәрәк, тип уйларға ғәҙәтләнгән. Үкенес: беҙҙә әле булһа байрам төшөнсәһе йылдар буйы ана шулай мул мәжлес өҫтәле һәм алкоголь менән бәйләнеп килеүен дауам итә. Уның ҡарауы, бындай "байрамдың" ахыры һәр ваҡытта ла күңелле булып бөтмәй шул. Был хаҡта мин күп йылдар буйы ҡабатлайым инде: борон халҡыбыҙ араҡының ни икәнен дә белмәгән, әммә ләкин матур итеп байрам иткән, ҡурайға ҡушылып йыр һуҙған, ер һелкетеп бейегән. Сөнки улар сәләмәт булған, араҡы түгел, ҡымыҙ, буҙа эскән, майлы бишбармаҡты ҡоротлап, ҡатыҡлап ашаған. Ә был әсетелгән һөт ризыҡтары ашҡаҙанды эшләтеп, аппетитты асып ебәрә. Ә бөгөн кеше байрам кисендә табынға ни ултыртҡан, ни әҙерләгән, шуның бөтәһен бер кистә ашай ҙа ашҡаҙаны, бауыры ауыртыуға сыҙай алмай, күптәрҙең киҫкен панкреатит өйөнәгә башлана. Өҫтәүенә, тамағына спиртлы эсемлек тә һалып алған булһа, сире уғата ҙур хәүефкә әйләнә. Тап Яңы йыл кисендә "тиҙ ярҙам" менән йә алкоголдән, йә ярамаған ризыҡтан ағыуланып, дауаханаға килеп эләгеүселәр күп була ла инде. Алкоголь үҙе үк зарар килтереү өҫтөнә, самаһыҙ ҡулланғанда, майлы-итле, ҡырҡыу ризыҡтар ҙа файҙаға түгел. Ә инде ҡайһы бер хужабикәләр табаҡ-табаҡ салат яһай ҙа ғаиләнең аҙна буйы шуны ашата. Был да бик хәүефле, сөнки уның составына, ғәҙәттә, йомортҡа, майонез, ит, колбаса кеүек тиҙ боҙола торған ризыҡтар ҡушыла.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: байрам фажиғәгә әүерелмәһен, тиһәгеҙ, табынығыҙ түренән араҡы-шарап шешәләрен ҡыуығыҙ, сәләмәт ризыҡтарға өҫтөнлөк бирегеҙ, ашауҙа сама белегеҙ. Республикабыҙ етәкселеге Яңы йыл байрамдарында сауҙа нөктәләрендә спиртлы эсемлектәр һатыуҙы сикләргә ҡарар итеп, бик дөрөҫ эшләй, ләкин эсергә әүәҫ кеше барыбер әмәлен табырға тырышасаҡ, шуға күрә һәр кемгә лә уның һаулығы, ғүмере үҙ ҡулдарында икәнлекте һис оноторға ярамай.

***Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА, пенсияләғы уҡытыусы:*** Минең ғаиләмдә лә, мин аралашҡан башҡа ғаиләләрҙә лә эскелек тигән йола юҡ, тимәк, уның фажиғәләре лә, әҙәмтәләре лә беҙҙең өсөн ят күренеш. Шуға ла, ошо темаға Хөкүмәт кимәлендә күтәреүҙәрҙе ишетеп, "йәшел йылан"дың үҙ яуызлығын дауам итеүен аңғарып, аптырап кителә хатта.

Беҙҙең өлкән быуын, әлбиттә, алкоголһеҙ байрам итеү тигәнде белмәне элек. Әммә балаларыбыҙ беҙҙе аныбыҙға, айыҡлыҡҡа килтерҙе. Бынан 20 йылдар самаһы элек өлкән ҡыҙымдың туйына әҙерләнәбеҙ. Буласаҡ ҡоҙалар менән өҫтәлгә ниндәй шарап, араҡы ҡуйыу тураһында ауыҙ ғына асҡайныҡ, балалар "Беҙҙең туй айыҡ буласаҡ!" тип ҡырт киҫте. Аптырабыраҡ ҡалдыҡ, сөнки ул саҡта әле айыҡ туй үткәреүселәрҙе ишеткән дә, күргән дә юҡ ине. "Һуң ҡунаҡтар ни тиер, эсмәгәс, күңел асып булырмы?" тип һаман үҙебеҙҙекен ныҡышабыҙ. Ҡыҫҡаһы, балалар еңде. Саҡырылған ҡунаҡтарға был турала алдан хәбәр иттек. Йәнәһе, бындай туй табынына килеү-килмәүҙе үҙегеҙ хәл итегеҙ. Бырыһы ла килде. Туй табыны уйын-көлкө менән шул тиклем шәп килеп сыҡты. Әле булһа иҫкә алып һөйләйҙәр...

Шөкөр, айыҡлыҡ үтеп инә бара тормошобоҙға. Бында күберәк йәш быуындың роле баһалап бөткөһөҙ. Улар халҡыбыҙҙың матур йолалары буйынса, айыҡ итеп туйҙар үткәрә, башҡа табындарҙы ла айыҡлыҡҡа ҡора. Былтыр, мәҫәлән, бер төркөм айыҡ башҡорт йәштәренең Яңы йыл сәғәте һуҡҡан мәлдә Салауат майҙанында уйын ҡороуҙарына, башҡаларҙы ла шунда саҡырып мөрәжәғәт итеүҙәренә шаһит булынғайны.

Ысынында, эскелеккә ҡаршы ҡулланылған бар сараларҙы хупларға кәрәк. Әммә иң мөһиме, етәкселәрҙең, йәштәрҙең, ниндәйҙер башҡа төркөмдәрҙең айыҡлыҡ өлгөһө һәм ошо инициативаға башҡаларҙы ла ылыҡтырыу өсөн эшләнгән эштәр. Ниндәйҙер ойошманың, йә район һәм ҡала хакимиәттәренең етәкселәре айыҡ икән, улар эргәһендәгеләр ҙә айығырға тырышасаҡ. Айыҡлыҡҡа саҡырыусы йәштәрҙең лидерҙары эргәһенә лә айыҡтар йыйыласаҡ. Был - хәҡиҡәт. Ысынында, ошо йәһәттән республика Башлығы Радий Хәбировтың эскелеккә ҡаршы әйткән һүҙҙәре, ҡабул иткән ҡарарҙары ла һөҙөмтә бирәсәк, йәғни иң тәүҙә етәкселәр тыйыласаҡ был яман ғәмәлдән. Ә етәксенең айыҡлыҡ өлгөһө күпкә, бик күпкә өлгәштерәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓Республика хөкүмәтендәге оператив кәнәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров төбәктә кадрҙар үҙгәреше хаҡында хәбәр итте. Марат Йосопов - Благовар районына, Бөрйән районы хакимиәтенең элекке башлығы Рөстәм Шәрипов - Хәйбулла районына хакимиәт башлыҡтары итеп тәғәйенләнде. Бөрйән районында етәксе вазифаһын быға тиклем муниципалитет башлығының иҡтисади мәсьәләләр буйынса урынбаҫары булып эшләгән Ғәзиз Манапов башҡара.

✓Башҡортостан парламентында Дәүләт Думаһындағы коллегаларының башланғысын хуплайҙар. Улар балиғ булмағандарға вейптар, кальяндар, электрон тәмәкеләр һәм башҡа ошондай тартыу ҡатышмаларын һатыуҙы тыйған федераль закон ҡабул итте. Законда уларҙы рекламалауҙы сикләү саралары индерелә, кальяндар һәм электрон тәмәкеләр ғәҙәти тәмәке изделиеларына тиңләштерелә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тәҡдиме менән башланған "Юғары ос!" мәғариф проектын ғәмәлгә ашырыу һөҙөмтәһендә республикала "Сәләмәт йылмайыу" модулен индереү буйынса эш йәйелдерелде.Ошо проект сиктәрендә 800-ҙән ашыу уҡыусы белем алған республика мәктәптәрендә стоматология бүлмәләре асыласаҡ. Дөйөм алғанда, республикала 61 мәктәптә стоматология бүлмәһен асыу ҡуҙаллана.

✓Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында "Башҡортостан саҡыра!" беренсе инвестиция форумы ойоштороло. Инвест-диалогҡа федераль башҡарма власть органдары, Рәсәйҙең тура инвестициялар, Сәнәғәтте үҫтереү, Моноҡалаларҙы үҫтереү фондтары вәкилдәре, шулай уҡ Азиянан һәм Европанан 500-ҙән ашыу ҡатнашыусы, яҡынса 300 компания, 120 киң мәғлүмәт сараһы вәкиле, 25 спикер килде.

✓Республика дауаханалары йәнә 13 ашығыс ярҙам машинаһын алды, тип хәбәр иттеләр Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан. Яңы автомобилдәр Бәләбәй, Баймаҡ, Белорет, Бөрйән, Бүздәк, Дүртөйлө райондарының үҙәк дауаханаларына, Сибай, Нефтекама, Салауат, Октябрьский, Стәрлетамаҡ ҡала дауаханаларына оҙатылды. Ишембай үҙәк дауаханаһы ике ашығыс медицина ярҙамы машинаһын алды.

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

**Башҡортостан - иң матур төбәктәрҙең береһе. Рәсәйҙең иң алдынғы төбәктәренең береһе булараҡ, Башҡортостан күптәргә өлгө булып торорлоҡ. Һуңғы ваҡытта айырыуса республикала йәнлелек һиҙелә, халыҡ та әүҙемләште: әйтер һүҙен тура бәреп әйтә, оҡшағанын - маҡтай, ә күңеленә хуш килмәгәнен тәнҡитләүҙән ҡурҡмай һәм оялмай башланы. Мин дә тыуған еремә ҡағылышлы күҙәтеү-ҡараштарым менән бүлешеп үткем килде.**

# БЕР-БЕРЕБЕҘҘЕ...

## ишетеп йәшәйек



Беҙҙең төбәктә шифаханалар күп, ләкин уларҙың ҡайһы берәүҙәре генә тел осонда, ә ҡалғандары тураһында артыҡ белеп тә етмәйбеҙ. Санаторийҙарҙы айырмай ғына, барыһы тураһында ла телевизор йәки радио аша тулы мәғлүмәт еткерһәләр, барыһына ла файҙаға булыр ине. Мәҫәлән, аҙна һайын республиканың бер шифаханаһы хаҡында тулы репортаж эшләү мөмкинлеге табылһа, ял йорттары өсөн дә, ял итергә теләүселәргә тик файҙаға ғына булыр ине.

Республика буйлап фельдшер-акушер пункттары, спорт майҙансыҡтары, клуб һәм башҡа төрлө социаль объекттар төҙөү бермә-бер артты. Ләкин уларҙың ҡайһы берәүҙәре башланып та аҙағына тиклем еткерелмәй. Ауырғазы районы Толбазы ауылы мәктәбе янында, балаларҙың спорт менән шөғөлләнгән майҙансыһын емереп, бассейнлы физкультура-һауыҡтырыу комплексы төҙөй башланылар, тик ул бөгөнгө көндә "туңдырылған". Яңыраҡ билдәле булыуынса, комплекс бөтөнләй икенсе майҙансыҡта төҙөләсәк икән. Ә тау-тау булып ятҡан балсыҡ өйөмөн, соҡорҙарҙы һәм сүп-сарҙы кем йыйып, кем ул урынды тәртипкә килтерергә һәм балаларға майҙансыҡтарын кире ҡайтарырға тейештер, аңлашылмай. Бер кеше тотош республикала барған төҙөлөштө контролдә тота алмай, әлбиттә, ләкин уның күп һанлы ярҙамсылары ҡайҙа ҡарай?

Баш ҡалабыҙ үҙенең йәшеллеге менән күптән билдәле. Меңйәшәр ағастар үҫкән йәшел "утрауҙар"ыбыҙ ҙа байтаҡ, шулай уҡ ҡала хакимиәте йәш үҫентеләр ултыртыу акциялары ла йылдан-йыл әүҙемләштерә. Шулай ҙа ҡайһы бер ошондай урмандарыбыҙ ҡот осҡос хәлдә. Ҡаланың Глумилино микрорайонындағы яңы йорттарҙа йәшәүселәр халыҡта "Бесәй урманы" тип йөрөтөлгән урындың ни тиклем бысраҡ һәм сүп-сарға батыуын күреп, уны таҙартыу өсөн бөтә йәмәғәтселекте саҡырҙы. Шуныһы ҡыуаныслы, был оранға баш ҡаланың Октябрь районы хакимиәте хеҙмәткәрҙәре һәм райондың башҡа ойошма вәкилдәре лә әүҙем ҡушылды. Әлбиттә, урманды бер өмә менән генә таҙартып бөтөү мөмкин түгел, ләкин халыҡтың һәм власть органдарының берҙәм булып, ойошҡан эшләүе уны аҙағына тиклем алып барып еткереүгә өмөт уята. Шулай, берберебеҙҙе ишетеп йәшәһәк, бөтәбеҙгә лә яҡшы түгелме ни?

Туризмды үҫтереүгә, уны популярлаштырыуға ҙур иғтибар бүлә башланылар. Бик хуп. Ләкин уның кире яғын әҙәйтеү өсөн дә көс түгелһә ине. Иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем республиканың ҙур йылғалары буйлап кәмәләрҙә ағып төшөүселәр күбәйә. Ләкин ҡайһы бер туристар артынан күпме сүп-сар ҡалыуын ҡайһы бер туризм өлкәһе чиновниктары күреп белмәй. Әгәр ҙә урындағы халыҡ һәр көн тиерлек моңһоҙ туристар артынан йыйып йөрөмәһә, йылға буйҙары күптән сүп-сар утрауҙарына әйләнер ине. Инйәр, Ағиҙел, Әй, Йүрүҙән йылғалары ярындағы ауылдарҙа йәшәүселәр күптән туризм менән булышыусы ойошмаларҙың "штаттан тыш йыйыштырыусылары". Йыймаҫтар ҙа ине, ләкин уларға шул урында йыл әйләнәһенә йәшәргә кәрәк, ә ул төбәктәргә йылына меңләгән туристың барыуын иҫәпкә алғанда, ауыл халҡының күпме көсө, ваҡыты ошо эшкә йүнәлтелеүен аңлатып торорға кәрәкмәйҙер. Ә Ирәмәл тауына күтәрелгән ерҙәге ҡыйлыҡтың йылдан-йыл ҙурайыуына бер кем дә иғтибар итмәй, буғай. Тик Урал тауҙарын популярлаштырыу өсөн күп көсөн һалған Олег Чегодаев ҡына ошо хаҡта әсенеп яҙып сыҡты. Инйәр йылғаһы буйындағы ҡая-тауҙарға алып барған юлдар ситендәге сүп-сар мәхшәренән ҡотолоу юлын табырға кәрәк. Күптән кәрәк.

Һуңғы көн ваҡиғалары араһында иң ҡыуаныслыһы шул - төрлө район хакимиәте, депутаттар советы ултырыштарының башҡорт телендә алып барылыуы! Әлегә тиклем республиканың ике дәүләт теле булыуы тик формаль рәүештә генә булһа, хәҙер уны аныҡ эштәрҙә күрәбеҙ. Әлеге райондарҙың миҫалын башҡалар ҙа үрнәк итеп алыр, тигән өмөттәмен.

**Ғәлим ИШБУЛДИН.**
**Салауат районы.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# АЛЛАҺ ҠӨҘРӘТЕНДӘМЕ,

## әллә депутат ҡулындамы?



**Ил иҡтисадында үҫеш күҙәтелмәй, халыҡтың яртыһы ашарға һәм кейенергә саҡ еткерә, ә бына байҙар байығандан-байый, тип гәжәпләнә "КП.RU" көндәлек электрон гәзит эксперттары. Былтырғыға ҡарағанда долларлы миллионерҙар ҙа (172 меңдән - 246 меңгәсә), миллиардерҙар һаны ла (74-тән - 110-ға тиклем) 1,5-әр тапҡырға артҡан. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, улар ил ҡаҙнаһына һалым түләмәй, ә капиталын ҡайһы илгә алып сыҡҡан, шуның резиденты һәм гражданы булараҡ, ошо сит ил ҡаҙнаһын аҫрай.**

Илдә "тигеҙһеҙлек кимәле юғары нөктәлә" (РФ иҡтисад үҫеше министры Максим Орешкин һүҙҙәре) тип танылған мәлдә илдәге социаль хәлде бер аҙға булһа ла тотороҡландырыу маҡсатында яңыраҡ ҡына йыллыҡ килеме 24 млн тәшкил иткән байҙар килеменән һалымды 5 процентҡа күтәреү тураһында тәҡдим Дәүләт Думаһы тарафынан кире ҡағылды. Был башланғыс авторҙарының береһе депутат Олег Нилов белдереүенсә, ун тапҡырҙан ашыу тәҡдим ителеп тә, был проектты ҡабул итеүгә өлгәшеп булмаған. Йәнәһе лә, "һалым ауырлығын арттырыуға халыҡ ризаһыҙлыҡ белдерәсәк" тип һылтана Дәүләт Думаһы. Ҡыҙыҡ, йыллыҡ килеме 2 миллионға еткән байҙар йөҙөндә "халыҡ"ты ҡүҙаллаусы депутат корпусы 18 млн самаһы ярлы ҡатлам хәлен нисегерәк баһалай икән һуң? Байҙарҙан аҡмаһа ла тамып торһа, ҡаҙна тоғона ямаулыҡ булып, халыҡтың матди хәлен аҙға булһа ла тотороҡландырыуға ярҙам итер ине был, ләкин... Эксперттар фекеренсә, прогрессив һалым системаһына юғары кимәлдә табу һалынған. Илдең һалым системаһының да камил булып етмәүе әлеге шул байҙар файҙаһына эшләй. Ябай халыҡтың һуҡыр тиненән дә һалым һығып алырҙар, ә бына байҙар һәм үтә байҙар өсөн үҙ илдәре ҡаҙнаһына һалым түләмәҫ өсөн әлеге камил булып етешмәгән Рәсәй һалым системаһынан ялтарырға ек-йоҡ табылып ҡына тора. Мәҫәлән, ошоға тиклем йылына 183 көн Рәсәйҙә йәшәгән байҙар килемдәренән һалымды ошо илгә түләргә тейеш булһа, улар, тәбиғи, күберәк ваҡыттарын икенсе гражданлыҡ алып, капиталдарын күсергән шул илдә йәшәй бирә йә берәй экиәти утрауҙа ял итә. РФ Финанс министрлығы был ике йөҙләлеккә сик ҡуйырға йөрьәт итеп, байҙарҙың Рәсәйҙә булыу ваҡытын ике тапҡырға ҡыҫҡартырға тәҡдим итә, йәғни хәҙер үҙен аҫраған илдә йылына 90 көн булған осраҡта бай әфәнделәр Рәсәй резиденты булып иҫәпләнәсәк һәм килеменән һалымды Рәсәй ҡаҙнаһына түләргә тейеш буласаҡ. Һәм, гөмүмән, Рәсәйҙә күсемлеҙ милке, бизнесы һәм хатта шәхси бәйләнештәре булған сүрәттә лә һалым түләргә бурыслы улар, тип әйтелә документта. Тик ... был тәҡдим тағы ла Дәүләт Думаһы ҡарауына тапшырылған һәм уның ахыры ни менән бөтәрөн бер Алла ғына белә. Бәлки, илаһи көс ҡыҫылышы кәрәктер был мәсьәләлә, юғиһә был ролде депутаттар үҙ ҡулдарына алмаҡсы түгелме һуң?..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Дәүләт башлығының ун бишенсе матбуғат конференцияһында "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының махсус хәбәрсеһе Азат Ғиззәтуллин Рәсәй президенты Владимир Путинға һорау бирҙе: "Һеҙҙең фекерегеҙсә, федераль кимәлдә эскелеккә ҡаршы тағы ла ниндәй саралар кәрәк, бәлки, тағы ла һөҙөмтәлерәк алымдар барҙыр, мәҫәлән, кешеләргә эскелек урынына берәй нәмә тәҡдим итергәләр?" - тип һораны Азат Ғиззәтуллин.

✓"Башҡортостан сәскәләре" торлаҡ районындағы урамға Даян Мурзиндың исеме бирелә, тип хәбәр итә ҡала Советының матбуғат хеҙмәте. Бынан тыш, унда Әнғәм Атнабаев, Академик Сөләймәнов, Автомобиль һәм Экология урамдары була. Шулай уҡ Киров районында - Хәбир Ғәлимов, Дим бисҭәһендә Төҙөүсе Самарин урамы барлыҡҡа киләсәк.

✓Башҡортостанда һауа шарттарының боҙолоуы көтөлә. Алдағы көндәрҙә республика биләмәһендә ҡар, епшек ҡар, ел секундына 17-22 метрға тиклем көсәйгәндә буран фаразлана. Юлдарҙа көрт, ҡар бутҡаһы, боҙлауыҡ. Ял көндәренә, синоптиктар күҙаллауы буйынса, һауа торошо үҙгәрә һәм көндәр һалҡынайта.

✓Башҡортостан синоптиктары хәбәр итеүенсә, 2020 йылдың башында һыуыҡ була. "Гисметео" порталы мәғлүмәттәре буйынса, 7 ғинуарға табан термометр бағанаһы -30 градусҡа тиклем төшә башлай. 7 ғинуарҙан 10-ына тиклем республикаға быған булмаған һыуыҡтар килә: төндә -42, көндөҙ -36 градусҡаса һыуытыуы көтөлә.

✓ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре 25 декабргә тиклем "Бурыслы" иҫкәртеү операцияһы барышында водителдәрҙең бурыслы бармы, юҡмы икәнен тикшерә. Штрафты административ хоҡуҡ боҙоу тураһында ҡарар үҙ көсөнә ингәндән һуң 60 көн эсендә түләмәгән өсөн гәйеплегә икеләтә штраф тәғәйенләнә йәки ул 15 тәүлеккә ҡулға алына, йә иһә 50 сәғәткә тиклем мәжбүри эштәргә йәлеп ителә. Ә бына штрафты 20 көн эсендә түләгәндә сумманың 50 процентын ғына түләү мөмкинлеге бар.

✓28 декабрҙә Өфөлә яңы йыл алды сараһы - Ҡыш бабайҙар парады ойошторола. Ҡыш бабайҙар парадында ҡатнашыусыларҙан ғаризалар 18 декабргә тиклем lenokmp@yandex.ru электрон почтаһына ҡабул ителә. Ғаризаға Ҡыш бабай йәки Ҡарһылыу костюмын кейеп төшкән фото һалырға кәрәк. Белешмәләр өсөн телефон: 229-04-35 - Өфө ҡалаһы Ленин районы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм йәштәр сәйәсәте бүлеге.

ҺОРАУ - ЯУАП



# ПЕНСИЯ ХӘЛЕ НИ ХӘЛ?

**Түҙгәнгә - түш...**

Пенсияны һуңыраҡ юллаһаң, ул арттырылған күләмдә түләнәсәк, тип ишеттем, шул дөрөҫмө, тигән һорау бирәләр. Эйе. Был ысынлап та шулай. Әгәр йәшегеҙ килеп етеүгә ҡарамаҫтан, пенсия тәғәйенләүҙе һорап мөрәжәғәт итмәһәгеҙ, пенсия алмаған һәр йыл өсөн һеҙгә премия коэффициенты түләнәсәк. Пенсия алмайынса иң оҙаҡ тигәндә 10 йыл йөрөргә мөмкин. Ҡыҫҡаһы, күберәк ваҡыт үткән һайын, өҫтәмә лә күберәк буласаҡ. Мәҫәлән, пенсия тәғәйенләүҙе һорап, пенсия йәше еткәндән һуң өс йылдан мөрәжәғәт иткән хәлдә билдәләнгән түләү - 19, ә страховкалы пенсия 24 процентҡа арта. Ә инде пенсияһыҙ ун йыл йөшәгән хәлдә билдәләнгән түләү 2,11 тапҡыр, страховкалы өлөшө 2,32 тапҡырға артасаҡ.

**Стаж етмәһә...**

Пенсия йәше етһә лә, стаж һәм балдар буйынса минимум тулмаған хәлдә нимә була, тигән һорауға эшләүҙе дауам итергә хоҡуҡ бирелә, тип яуапларға мөмкин. Ғәҙәттә, эш хаҡын конвертта алып эшләгән кешеләрҙең пенсия балы һәм стажы тулмай, дөйөм алғанда иһә бөгөн тейешле күләмдә балл һәм стаж туплауы ауыр түгел: ул кешенең тотош хеҙмәт юлы буйына дауам итә. Ә пенсияға сығыр ваҡыт еткән осорға Рәсәйҙә уртаса стаж, мәғлүм булыуынса, 35 йыл. Ошо ваҡыт эсендә иң аҙ эш хаҡы алып эшләгән хәлдә лә тейешле күләмдән хатта артығыраҡ һанда балл тупларға була. Ә инде бирелгән һорауға килгәндә, Рәсәйҙә кеше барыбер пенсияһыҙ тороп ҡалмаясаҡ. Әгәр ниндәйҙер сәбәптәр менән кешенең страховкалы пенсияға хоҡуғы юҡ икән, ул ҡатындарға - 60, ирҙәргә 65 йәштән тәғәйенләнә торған социаль пенсия юллап мөрәжәғәт итә ала.

**Инвалидка ни эшләргә?**

Әгәр кеше инвалид тип танылған икән, уға шунда уҡ пенсия тәғәйенләнә: әгәр бер генә көн хеҙмәт стажы булһа - инвалидлыҡ буйынса страховкалы, ә инде стажы бөтөнләй булмаһа, инвалидлыҡ буйынса социаль пенсия тәғәйенләнә.

**Страховкалы пенсия...**

Был шул уҡ хеҙмәт пенсияһы, йәғни һеҙҙең үҙ көсөгөҙҙә һалып эшләп алған пенсияғыҙ. 2015 йылға тиклем шулай атап йөрөтөлдө лә ул. Хәҙер иһә страховкалы пенсия тип йөрөтөлә һәм уның суммаһы һеҙҙең өсөн эш биреүсегеҙ күсергән страховкалы взносҡа бәйле. Минималь хеҙмәт стажы (2018 йылда ул 9 йыл ине, ләкин йыл да арта бара) менән минималь һанда пенсия балына (2018 йылда 13,8 балл ине, ул да арттырыла бара) эйә булғандарҙың страховкалы пенсияға хоҡуғы бар. Страховкалы пенсия йәш буйынса (ҡартлыҡ), инвалидлыҡ сәбәпле йә ғаилә ҡараусыһын юғалтҡан осраҡта тәғәйенләнә. Страховкалы пенсияға, уның төрҙәренә ҡарап, тәғәйен күләмдә тотороҡло түләү билдәләнә.

**(Дауамы бар).**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠАЙҘА ҮЛЕМ ҺАТАЛАР?

**Башҡортостанда йәшәүселәргә ялған алкоголь һатыу тураһында дөрөҫ мәғлүмәт өсөн аҡсалата бүләк вәғәҙә ителә. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте.**

"Бөгөндән беҙ кешеләрҙең үлеменә сәбәпсе булған ялған спиртлы эсемлектәр менән йәшерен сауҙалағы әлмәкте тағы ла нығыраҡ тартабыҙ. Мәғлүмәт еткереүселәргә аҡса түләй башлайбыҙ. Етештереүселәр хаҡында мәғлүмәткә - 50 мең һум, һатыусы тураһында мәғлүмәткә - 2 мең һум. Йәшеренлекте һәм ғәҙел түләүҙе гарантиялайбыҙ", - тип вәғәҙәләй республика етәксеһе. Бутлегерҙарға ҡаршы әүҙем көрәш башланғандан алып республикала 115 ғүмер һаҡлап ҡалынған, һигеҙ йәшерен етештереү цехы ябылған һәм 70 мең литрҙан ашыу спиртлы продукция тартып алынған, тип билдәләне Радий Хәбиров. Башҡортостан Башлығы "көбәхәттәр" тураһында "Хәүефһеҙ мөхит" порталында (төрлек әйләнәһенә) йәки +7 (347) 218-09-87 телефоны буйынса (эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 7-гә тиклем) Башҡортостан Республикаһының Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитетына хәбәр итергә саҡырҙы.

Хәбәр ителеүенсә, май аҙағында Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Башҡортостан Республикаһында этил спирты, алкоголле һәм спиртлы продукция етештереү, уларҙың әйләнеше өлкәһендәге эшмәкәрлекте көйләү һәм алкоголле продукцияны ҡулланыуҙы сикләү тураһында" республика законына үҙгәрештәр индерҙе. Магазиндарҙа киске сәғәт 10-дан иртәнге 10-ға тиклем (элек киске 11-ҙән иртәнге 8-гә тиклем ине) иҫерткес эсемлектәр һатырға ярамай. 3 ғинуарҙа республикала алкоголь һатыуҙы бөтөнләй тыйыуҙы күҙ уңында тотҡан закон проекты Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында ҡарала. 4-6 ғинуарҙа хәмерҙе урындағы ваҡыт буйынса иртәнге сәғәт 10-дан көндөҙгө 2-гә тиклем генә һатырға тәҡдим ителә.

# АУЫЛ УҠЫТЫУСЫҺЫНА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ауылда эшләгән йәш уҡытыусыларға тәүге гранттар тапшырҙы.**

600 мең һумлыҡ грант 2019 йылдың июлендә йәш, перспективалы ауыл уктыусыларына булышлыҡ итеү өсөн булдырылған. 2020 йылда гранттар һанын 150-гә тиклем арттырыу күҙаллана. Шулай уҡ Радий Хәбиров мәғариф системаһы хеҙмәткәрҙәрен республиканың дәүләт наградалары менән бүләкләне. "Һеҙ республика, беҙҙең балалар өсөн бик күп эш башҡарһығыҙ. Яңы объекттар төҙөү, мәктәптәрҙә яңы технологиялар индереү буйынса пландарыбыҙ ҙур, - тине республика етәксеһе. - 2020 йылдың февралендә уҡытыусылар берләшмәһе менән мәғариф системаһынының артабанғы үҫешен тикшерергә тәҡдим итәм. Ауыл уҡытыусыларына ярҙам күрһәтеүгә килгәндә, уны дауам итербеҙ. Кәрәк булған осраҡта, ауылдарыбыҙҙа йәш уҡытыусылар эшләһен өсөн гранттар һанын арттырырға әҙербеҙ".

Әйткәндәй, республика Башлығы Радий Хәбировтың Указына ярашлы, 2019 йылдың 1 июленән йыл һайын конкурс нигеҙендә 100 грант тапшырыу ҡаралған. Уға ауыл ерендәге дөйөм белем биреү ойошмаларында ике йылдан ашыуыраҡ эшләгән 35 йәшкә тиклемге уҡытыусылар дәғүә итә ала. Халыҡ һаны 10 мендән артмаҫҡа тейеш. Уҡытыусыларҙы муниципаль райондарҙың дөйөм белем биреү ойошмалары һәм мәғариф менән идара итеү органдары күрһәтә.

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ЙЫЛЫ

**Радий Хәбиров Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы ағзалары һәм республика район-ҡалалары ҡоролтайҙары рәйестәре менән осрашты. Осрашыуҙың маҡсаты башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү тәҡдимдәрен тикшереү ине.**



"Башинформ" агентлығы хәбәр итеүенсә, был осрашыуға тиклем урындағы башҡорт ҡоролтайҙары етәкселәре стратегик сессия эшендә ҡатнашып, ошо юҫыктағы 300-ҙән ашыу тәҡдимде тикшергәйне. Уларҙың ҡайһы берҙәре республика Башлығы иғтибарына еткерелде.

Мәҫәлән, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы 2020 йылды Башҡорт теле йылы тип нарыҡларға тәҡдим итте. Радий Хәбиров был тәҡдимде хупланы. Осрашыуҙа ҡатнашыусылар "Башҡорт теле аҙналығы" эстафетаһын үткәреү, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында башҡорт төркөмдәре асыуҙы әүҙемләштереү, ауылдарҙа балалар театрҙары ойоштороу, район һәм ҡала ҡоролтайҙарына ярҙам күрһәтеү кеүек темаларҙы тикшерҙе. Әйтәйек, Күмертау башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Әлфиә Шәмиғолова ҡалала ойошторолған һәм популярлыҡ менән файҙаланған башҡорт телен өйрәнеү буйынса бушлай курстар тураһында һөйләне. Был тәжрибәне республиканың башҡа ҡалаларында ла таратырға кәрәк тигән тәҡдим әйтелде. Республика етәксеһе тарих фәндәре кандидаты Юлдаш Йосоповтың Башҡорт ырыуҙары парадын уҙғарыу идеяһын хупланы.

# ЙӘЙӘҮЛЕЛӘР УРАМЫ БУЛЫРМЫ?

**Радий Хәбиров Өфө үҙәгендә йәйәүлеләр урамын булдырыу пландары тураһында һөйләне. Бының өсөн Октябрь революцияһы урамын һайлау ихтималлығын билдәләне.**

"Әлегә властарҙың урамды яр буйына төшөү юлына әүерелдереү буйынса "эшкәртелмәгән эш версияһы" бар. Беҙ бында төҙөлөш менән инергә теләмәйбеҙ, ошо бороңғо биналар эшләй башлаһын өсөн унда тәртип урынлаштырырға кәрәк", - тине республика етәксеһе Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары һәм граждандлыҡ йәмғиәте институттарын үҫтереү буйынса совет ултырышында. Кеше хоҡуҡтары буйынса совет ағзаһы Эльза Мәүлимшина Өфөлә мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау проблемалары хаҡында һөйләне. Ул ҡаланы шартлы рәүештә өс зонаға бүлде: тарихи үҙәк, иҫке Өфө һәм Черниковка. Һәр зона буйынса проблемалар айырыла. Билдәләнеүенсә, Иҫке Өфөлә бороңғо биналарҙы реконструкцияларға һәм уларҙы коммерция маҡсатында файҙаланырға әҙер потенциаль инвесторҙар бар. Ҡалала бөтәһе 182 мәҙәни мираҫ объекты асыҡланған.

# Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда өсөнсө балаға атай капиталын бирергә тәҡдим ителәр. Был тәҡдим һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләренә арналған тармаҡ дискуссияһы барышында яңғыраны. Өфө мэры урынбаҫары һәм "Берҙәм Рәсәй"ҙең ҡала бүлексәһе секретары Алина Сөләймәнова был тәҡдимде яҡлау һәм уны закон сығарыу башланғысы итеп ғәмәлгә ашырыу менән уның партия буйынса коллегалары шөғөлләнәсәген билдәләне.

✓Быйыл Кремлдә Яңы йыл шыршыһы 25 декабрҙә була. Яңы йыл байрамына Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән 6 мең самаһы бала саҡырылған. Башҡортостандан Мәскәүгә 140-тан ашыу кешенән торған делегация юллана. Уларҙың 114-е - 8-13 йәшлек балалар, 28-е - оҙатып барыусылар (педиатрҙар, хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре, уҡытыусылар). 26 декабрҙә уҡыусылар өйҙәренә әйләнеп ҡайта.

✓Рәсәйҙә 2020 йылдан инфаркт, инсульт кисергән һәм йөрәгенә операция яһатҡан пациенттар бушлай дарыуҙар ала башлай. Был хаҡта һаулыҡ һаҡлау министры Вероника Скворцова белдерҙе. Билдәләнеүенсә, Рәсәйҙә йәшәүселәр бушлай дарыуҙарҙы сир башланғандан алып ике йыл дауамында алырға мөмкин.

✓Башҡортостан Рәсәйҙә "Инцидент менеджмент" системаһында эшләү буйынса лидерҙар иҫәбенә инә. Рәсәй президенты хакимиәте күҙәтеүендәге автоматлаштырылған мониторинг системаһы республикала 2018 йылдың октябренән индерелде. Система проблемалы һорауҙарҙы асыҡлай һәм уларҙы профилле министрлыҡтарға, ведомстволарға йәки муниципалитеттарға ебәрә. 2019 йылдың 1 ғинуарынан 75 мендән ашыу "инцидент" теркәлгән һәм эшкәртелгән.

✓Ике йылдан Өфөнөң Аврора һәм Батыр урамы тирәһендә 446,5 миллион һумға гимнастика буйынса балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбенең физкультура-һауыҡтырыу комплексы төҙөләсәк. Ул тренажер залын, халыҡара ярыштар өсөн сертификациялы ярыш залын, ҡунаҡхананы һәм реабилитация үҙәген үҙ эсенә алырға тейеш. Әҙер объектты 2021 йылдың 30 ноябренә тапшырыу ҡаралған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

БАШ ҠАЛАМ

# ЙОРТ ҺАЛҒАНДАР БОҘҘАН...



(Башы 1-се биттә).

Совет майҙанында иһә ысын мәғәнәһендә боҙҙан әкиәт ҡаласығы төҙөлгән. Ситтән ҡарағанда хатта уларҙы гәлсәр һындар менән сағыштырырға мөмкин. Юл саты, юл уртаһы булғанлыҡтан, бында кеше күберәк кеүек тойола, әммә улар ошондағы министрлыҡтар һәм ойошмаларға килеүсе-китеүселәр, хеҙмәткәрҙәр, уҡыу йорттарына ашыҡҡан студенттар.

Ә бына Өфө ҡалаһының төп шыршыһы урынлашҡан Ленин исемендәге майҙанда иһә йәнлелек, балаларҙың шат тауышы әллә ҡайҙан ишетелә. Бында ла майҙанға килеп етмәҫ элек уларҙы пониҙар көтөп тора. Бында улар хатта күберәк тә. Ҡыҙыҡһынып, пониҙарҙың ҡайҙан килтерелгәнлеген һорашабыҙ. "Шәхси хужалыҡтан. Хужабикә махсус үҫтерә. Әле көнөнә бер нисә сәғәткә генә, кеше күберәк булған ваҡытҡа сығабыҙ, ә Яңы йыл байрамдарында иртәнән кискә тиклем теләүселәргә йөрөтәсәкбеҙ", - ти ҡыҙҙар. Сауҙа рәттәре лә, кибеттәре лә эшләй.

Һырғалаҡтарҙың әлегә береһе генә асылған, икенсеһе ябыҡ. Шунлыҡтан, балалар сират һаҡлай. Ә килеүселәр һаны, киреһенсә, арта ғына бара. Балаларҙы уйындарынан айырмаҫ өсөн уларҙың хәүефһеҙлеге һағында торған хоҡуҡ һаҡсыларына мөрәжәғәт итеп, көндөҙ халыҡ буламы, юҡмы, тип белешәбеҙ. "Эш көндәрендә кискә тиклем кеше бик булмай, ата-әсәләр - эштә, бәләкәйҙәр - балалар баҡсаларында, олораҡтары мәктәптә була. Төштән һуң яйлап күренә башлайҙар, ғәҙәттә, бына ошо - шыршыла уттар ҡабыныр ваҡытҡа киләләр. Киске 8-9-ҙар тирәһендә кеше күбәйә. Ял көндәрендә бигерәк тә. Йәкшәмбе кисен килеп, һырғалаҡтан шыуырға сират еткерә алмай ҡайттыҡ", - ти формалағы һылыуҙар.

Өфөнөң төп шыршыһында уттар нәҡ киске биштә ҡабына. Уны көтөп тороу үҙе бер мөғжизә булһа, ысын мөғжизә иһә һуңынан башлана. Сөнки быға тиклем баш ҡала бындай матурлыҡты күргәне юҡ ине әле. Италияның ут архитекторы һәм рәссам Валерио Фести идеяһы буйынса эшләнгән иллюминация, декоратив ҡышҡы фонтан, ысынлап та, иҫ киткес, хатта майҙанда боҙ скульптураларының бик булмауы ла күҙгә салынмай...

Әйткәндәй, ошо көндәрҙә ҡала хакимиәтенең махсус комиссияһы баш ҡаланың 11 боҙ майҙансығын (ғәмәлдә, йәмғеһе 31 ҡаласыҡ бар), шул иҫәптән мәкәләлә телгә алынған өс төп майҙандағыларҙы ла хәүефһеҙлек буйынса тикшерҙе һәм бер ни тиклем етешһеҙлектәр тапты. Комиссия бары тик "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркындағы боҙ майҙансығының ғына барлыҡ талаптарға ла яуап бирерлек булыуын асыҡланы.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# КҮҢЕЛЛЕ КӨНДӘР КӨТӘ

**Был аҙнала ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралыҡ начальнигы Шамил Абдраҡов 2020 йылды ҡаршы алыу концепцияһы менән таныштырҙы.**

Мәғлүм булыуынса, йыл башында уҡ баш ҡаланы Яңы йылға биҙәү буйынса "Байрамса Өфө" конкурсы иғлан ителгәйне. Декабрҙең һуңында, аныҡлап әйткәндә, 30-да конкурстың ҡала этабына йомғаҡ яһаласаҡ. Шулай уҡ ғәҙәттәгесә "Вьюговей" - иң яҡшы боҙ ҡаласығын төҙөү һәм шыршыларҙы биҙәү буйынса ҡала районлары араһында конкурс ойоштороласаҡ. Ул ике номинация буйынса үткәрелә: "Боҙ ҡаласығы" һәм "Әкиәти боҙ". Тәүгеһендә боҙ ҡаласығы, уның биҙәлеше һәм балалар өсөн хәүефһеҙлеге баһаланһа, икенсеһендә боҙҙан эшләнгән скульптуралар, уларҙың үҙенсәлеге һәм башҡарыу техникаһына иғтибар бирeләсәк.

Бынан тыш, барлыҡ мәҙәниәт учреждениелары 2 ғинуарҙан алып 250-нән ашыу төрлө сара: бал-маскарадтар, театрлаштырылған тамашалар, яңы йыл иртәләктәре, ял кисәләре, уйындар һәм башҡа бик күп саралар уҙғарырға ниәтләй.

Ғаилә менән ҡышҡы әүҙем ялды үҙ итеүселәрҙе мәҙәниәт һәм ял парктары, асылған майҙансыҡтар һәм боҙ ҡаласыҡтары көтә. Беренсе тапҡыр боҙ ҡаласыҡтарында төрлө саралар берҙәм ваҡытта үткәрелә: 1 ғинуарҙан барлыҡ ҡала районларында көндөҙгө 12-нән киске 7-гә тиклем интерактив уйындар һәм байрам программалары ойоштороласаҡ.

"Был саралар барыһы ла Яңы йылдан һуң, ә уға тиклем беҙҙе нимәләр көтә?" тип түҙемһеҙләнәләр күптәр. Борсолмағыҙ! 23 декабрҙә Ҡала мәҙәниәт һарайында сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән, етем, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар өсөн Ҡала хакимиәте башлығы шыршыһы үтәсәк. 24-ендә шулай уҡ һәләтле балалар, уҡыу адынғылары өсөн дә Баш ҡала шыршы байрамы ойоштороласаҡ.

28 декабрҙә Ленин исемендәге майҙанда барлыҡ райондарҙан килгән 700-ҙән ашыу Ҡыш бабай парадта уҙасаҡ.

Яңы йыл төнөндә Рус дәүләт академия драма театры алдында киске сәғәт 10-дан төнгө икегә тиклем дауам иткән эстрада-күңел асыу программаһын ҡарарға мөмкин буласаҡ. Программала башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары, профессиональ һәм үҙешмәкәр коллективтар һәм артистар сығыш яһаясаҡ. Байрамға Яңы йыл фейерверғы нөктә ҡуясаҡ.

Әйткәндәй, байрам саралары Яңы йылдан һуң да дауам итәсәк әле. 31 декабрҙән 2020 йылдың 5 ғинуарына тиклем икенсе тапҡыр "TERRA ZIMA" фестивале үткәреләсәк. 31 декабрҙә баш ҡала халҡын һәм ҡунаҡтарҙы Ҡунаҡһарай алдында Элвин Грей йыясаҡ. Ә инде 3 ғинуарҙа Ҡарһылыуҙар парады үтәсәк. "Арт-КВАДРАТ" ҡала үҙәге территорияһында ял зоналары булдырыласаҡ, ғәҙәти булмаған архитектура конструкцияларынан эшләнгән шыршылар урынлаштырыласаҡ. Шулай уҡ амфитеатр эргәһендәге майҙанда йәрминкәләр, башҡа саралар үткәреү планлаштырыла. Театр оҫтаханаларында спектаклдәр ҡуйыласаҡ, интеллектуаль аралашыуҙар һәм башҡа саралар ойоштороласаҡ.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БЛОГЕРҘАРҒА - ҺАЛЫМ

Рәсәй президенты Владимир Путин үҙмәшғүлдәр өсөн һалым буйынса экспериментта ҡатнашырға тейешле төбәктәр исемлеген ҡиңәйтте. 2020 йылдың ғинуарынан Башҡортостанда ла ошо яңылыҡ үҙ көсөнә инә. Исемлектә илдең тағы 18 субъекты: Санкт-Петербург, Ленинград, Түбәнге Новгород, Төмән өлкәләре, Краснодар һәм Пермь крайҙары, Югра һәм башҡалар бар. 2019 йылда Мәскәүҙә, Мәскәү, Калуга һәм Ростов өлкәләрендә, Татарстанда үҙмәшғүлдәр өсөн профессиональ һалым индерелде. Рәсәйҙәр Мотлаҡ медицина страховка фондына страховка взностары түләй, улар Пенсия фондына тотоп алып ҡалынмай.

Үҙмәшғүлдәрҙең эш биреүсеһе һәм ялланма эшселәре юҡ, йәғни улар - шәхси хеҙмәт эшмәкәрлегенән килем алған граждандар. Ҡағиҙә булараҡ, улар - фрилансерҙар, репетиторҙар, бала ҡараусылар, ауырыу ҡараусылар, фотографтар, блогерҙар, өй кондитерҙары, водителдәр, репетиторҙар һәм хатта торлаҡты ҡуртымға биреүселәр.

# ҠАРТТАРҒА ШАТЛЫҠ

2020 йылдың 1 ғинуарынан рәсәйҙәрҙең пенсияһы арта. Пенсия фонды бюджетында, инфляцияны уҙып китеп, киләһе йылға пенсияны индексациялау ҡаралған. Әйтәйек, рәсәйҙәрҙең пенсияһы айына бер мең һумға арта. Түләү, былтырғы кеүек уҡ, законда билдәләнгән ваҡыттан бер ай алдараҡ - 1 февралдә түгел, ә 1 ғинуарҙа индексациялана. 2020 йылдың 1 ғинуарынан эшләмәгән рәсәйҙәрҙең уртаса пенсияһы айына 16 400 һум була. Илдә 40 миллион кешегә өҫтәмә түләнә. 2020 йылдың 1 апреленән, пенсионерҙың йәшәү минимумы кимәленә ярашлы, дәүләт тәьминәте буйынса пенсия 7 процентҡа индексациялана. Рәсәйҙә эшләп йөрөгән һәм эшләмәгән 4 миллион пенсионерға ошондай пенсия түләнә. 2020 йылдың 1 февраленән социаль хеҙмәттәр йыйылмаһының айлыҡ аҡсалата түләүе һәм аҡса эквиваленты 3,8 процентҡа арттырыла. Был 15 миллион граждандаға ҡағыла.

# ЙОРТОНДО ЙҮНӘТ

Киләһе йылдан ауыл халҡы банктарға үҙҙәренең йорттарын төҙөкләндереүгә льготалы кредит һорап мөрәжәғәт итә ала. Хөкүмәт процент ставкаларын субсидиялай, улар ауыл халҡы өсөн 5 проценттан артмаҫҡа тейеш. Премьер-министр Дмитрий Медведев ауыл ерендә өйҙә төҙөкләндереү кимәлен күтәреү өсөн бирелгән ҡулланыу кредиттары буйынса алып еткерелмәгән килемдә банктарға ҡайтарыу ҡағиҙәләрен раҫлаламы. 1 ғинуарҙан уҡ граждандар вәкәләтле банктарға йортҡа үҙәкләштерелгән йәки автономлы электр, һыу һәм газ, йылытыу һәм канализация үткәреү, шулай уҡ подряд килешеүе буйынса торлаҡты ремонтлау өсөн кредит биреүҙе һорап мөрәжәғәт итә ала. Күпселек төбәктәр өсөн кредиттың күләме 250 мең һум тәшкил итә.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Бөйөрҙә таштар булһа

❖ 1 кг яңы петрушка үләнен тамыры менән йолҡоп алырға, сельдерейҙың бер ҙур тамыры, 1 кг бал һәм 1 литр һыуҙы бергә ҡушып һалып, талғын утта ҡайнатҡансы торорға, ваҡыты-ваҡыты менән болғатып торорға. Әҙер дауаны 3 көн төнәтергә. Шунан тағы ла 1 литр һыу өҫтәп ҡойоп ҡайнар хәлгә еткерергә, һыуымаҫ элек һөҙөп алырға. Килеп сыҡҡан шифалы эсемлекте ашарҙан алда 3-әр ҡалаҡ эсергә.

## Ҡан тамырҙарын таҙартыу

❖ Ромашка, һары мәтрүшкә, шинмәсгөлдөн (бессмертник) ваҡланған сәскәләрен һәм ҡайын бөрөләрен 100-әр грамм алып бергә ҡушырға. 1 ҡалаҡ әҙерләмәгә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп 3-4 сәғәт төнәтергә. Шунан төнәтмәнең яртыһын һөҙөп алып, бер ҡалаҡ бал ҡушып киске аштан алда эсергә. Иртәнсәк ҡалғанын йылытып, бер ҡалаҡ бал ҡушып иртәнге аштан алда эсеп ҡуйырға. Был рәүешле дауаланыуҙы ошо әҙерләнгән үләндәр бөткәнсе дауам итергә. Шуныһы мөһим: был төнәтмәне 5 йылға бер тапҡыр ғына эшләп эсергә ярай.

## Һимереүҙән

❖ Кәбеҫтәнең яңы һутын көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 0,5 стакан эсергә. Һут миҡдарын икенсе аҙна азағына 2 стаканға тиклем арттырырға. Шулай уҡ бер ай дауамында көн һайын 1 стакан яңы петрушка ҡайнатмаһын эсеүҙә ярҙам итә.

## Аҙ ҡанлылыҡтан

❖ Ярты стакан сөгөлдөр һутына 1 балғалаҡ бал ҡушып болғап, ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә өс тапҡыр эсергә. Һәр эскән һайын ҡатышманы яңынан әҙерләргә.

❖ Тағы ла аҙ ҡанлылыҡ булғанда кишер, сөгөлдөр һәм торма (редька) һутын бер тигеҙ нисбәттә алып, оҙайлы ваҡыт 2 ҡалаҡлап эсергә кәрәк.

## Әҫпе (диатез) ҡалҡҡанда

❖ Әҫпеһе ҡалҡҡан балаға ҡара торма (черная редька) һутын эсерергә кәрәк. Башлап бер тамсы ғына эсерергә, артабан һуттың миҡдарын көн һайын ике тамсыға арттыра барып, бер ҡалаҡҡа тиклем еткерергә була. Һутты көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15-20 минут алда эсергә.

**✓ *Бына шундай учреждениеларҙы илдәге хәмер эсемлектәрен етештереүсе предприятиеларға йөкмәтеү кәрәк. Әйҙә улар айныҭкыстар ҙа төҙөһөн, ундағы хеҙмәтләндереүселәргә эш хаҡы ла түләһен.***



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**Нигеҙендә лираға оҡшаш мотивтар - бер-береһенә ҡаратып һәм башланғыс һыҙыҡтағы нөктәнән аҫҡа ҡарай бөгөп эшләнгән кәкерсәктәр, ятҡан ҡусҡарлы композицияларҙа һөңгө һыҙаты айырыуса аныҡ күренгән.**

Биҙәк осло сығынтыларынан һәм һөҙәк ситенән башлап өҫкә ҡарай үҫтерелә барған. Иң ябай төрҙәрендә төп фигураның осонан бер пар мөгөҙ күтәрелеп тора, йә һөңгө осона оҡшаш ҡыя шаҡмаҡ сығынты. Үҙәк фигура бик һирәк осраҡта ғына тоташып килгән. Ул бәләкәй генә өсмөйөш йәки трапецияға тартым ултыртмала торған, йәки аҫҡы сиге йәнәш килгән ике йәйә формаһындағы биҙәк менән билдәләнгән. Был серияның тармаҡлы орнаменттары, ғәҙәттә, түшәк йәки серге остарын биҙәгән.



*Лираға оҡшаш. Автор һүрәте.*

С.И. Руденко урта быуат малсы-күскенселәренең нағышлау ижадсылығында айырып ҡараған ике осло ырғаҡ (интеграл) фигураһы башҡорттарҙың көньяҡ-көнсығыш ҡайыуында төҫтәр ярҙамында ике өлөшкә бүленгән һәм асылында ике кәкерсәктән торған. Өс һәм дүрт өлөштән торған әйләнмәле ояларҙың (турбулентные розетки) кәкерсәктәре лә шулай уҡ төрлө төҫтән эшләнгән. Йыш ҡына айырым ике осло ырғаҡ һәм оя биҙәктәр сергенең ситке ҡаймаһына сигелгән. Ерлек үҙәгендә улар ҡусҡар орнаментының яңы төрҙәренең нигеҙен тәшкил итә алған.



*Киҫешкән ике осло ырғаҡтарҙан торған оя биҙәктәр. Автор һүрәте*

Уртаһында "х" хәрефенә оҡшаш фигура урынлашҡан биҙәктәр киң таралған. Ҡайһы бер ҡайыу өлгөләрендә уның һыҙаттары киҫешкән ике осло ырғаҡтарҙы хәтерләткән, шул уҡ ваҡытта ерлек өҫтө ҡапма-ҡаршы торған һөңгө башы һүрәтен хасил иткән. Башҡа ҡайыу оҫталары үҙәк фигураның өҫкө һәм аҫҡы өлөшөн ике төҫкә буяғанда уны көҙгөлә сағылған мөгөҙҙәр итеп күҙ алдына килтергән. Тәүге нигеҙ фигура бөгөлгән һыҙыҡтар һәм япраҡтар менән ҡатмарландырылып, ҡайһы саҡта хикмәтле һыҙаттар алған. Алда күрһәтелгән биҙәк серияларынан айырмалы рәүештә, был осраҡта биҙәктәр буйға ғына түгел, арҡырыға ла симметрия һаҡлап төҙөлгән.



*Япраҡлы ботаҡтар - ҡусҡарлы биҙәккә ғәҙәти өҫтәмә (БР, Белорет районы, Шығай ауылы). Автор фотоһы. 1976*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ШАҢДАУ*



**Гәзитебеҙҙең 46-сы һанында "Илдә айныҭкыстарҙы ҡайтанан тергеҙергә йыйыналар, был кәрәкме?" тигән баш аҫтында бер нисә кешенең фекерен уҡып сыҡтым. "Әйт, тиһәгеҙ" рубрикаһы менән сыҡҡан әлеге әңгәмәлә ҡатнашыусыларҙың кемдәрелер "төшөрөргә" ятраҡан кешеләрҙең һаулығы (хатта ғүмере!) өсөн борсолһа, икенселәре уларҙың унһыҙ ҙа һай кеҫәләрен "ҡурсый", өсөнсөләре эскеселәрҙең ғаилә ағзаларын ҡайғырта. Был авторҙар һәммәһе лә әлеге категория кешеләренә ҡарата тик изге теләктә (эскеселәр уларҙың ҡәҙерен белмәһәләр ҙә).**

# АЙНЫҬКЫСТАР КӘРӘК!



Айгөл исемле яҡташыбыҙ ҡасандыр үҫмер сағында ана шул йортто үҙе үк инеп күргәнлеге хаҡында ла яҙған. Унда төнәп сыҡҡан кешеләрҙе "Нисек итеп баш төҙәтергә икән?" тигән уйҙан башҡа бер нәмә лә борсомағанын аңлай алған ун биш йәшлек зирәк ҡыҙ. Ифрат та дөрөҫ фекер. Ысынлап та, бындай учреждениеларҙа тәҡдим ителгән психолог, нарколог, алкоголгә ҡаршы дауалау сеанстары үткәреүселәрҙең тырышлыҡтары юҡҡа ғына буласаҡ. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә был шешә ярата-усыларҙы айыҡлыҡҡа өндәүҙән бер ниндәй ҙә файҙа булмаясаҡ. Минеңсә, уларҙы "алкоголизм" тип аталған яман сирҙән дауалау урыны бөтөнләй башҡа булырға тейеш. Ә шулай ҙа, табип Азамат Ҡашҡаров әйтмешләй, урамда туңып ятмаһын, йә хулиган-маҙарҙарҙан туҡмалып үлмәһен өсөн әлеге бер төнлөк йоҡлап сығыу урыны кәрәктер.

Илдә унһыҙ ҙа көрсөк сәскә атҡан мәлдә бындай йортто тотоу, әлеге "төнгө ҡунаҡтарҙы" хеҙмәтләндереүселәрҙе финанслау мәсьәләһе, моғайын, иң төп төйөн булып торалыр. Шунлыҡтан, "һуғырға" яратҡан әҙәм балаларын, исмаһам, йоҡлатып сығарғандары өсөн бер-нисә көнгә мәжбүри, бушлай эшләтеп алыу ҙа артыҡ булмаҫ ине. Был - беренсенән.

**Икенсенән, бына шундай учреждениеларҙы аҡса менән тәьмин итеп тороу бурысын илдәге хәмер эсемлектәрен етештереүсе предприятиеларға йөкмәтеү кәрәк. Әйҙә улар айныҭкыстар ҙа төҙөһөн, ундағы медицина, полиция хеҙмәткәрҙәренә һәм башҡа хеҙмәтләндереүселәргә эш хаҡы ла түләһен - был ифрат та ғәҙел буласаҡ. Урыҫта бер әйтем йөрөй: "Любишь кататься - люби и саночки возить!" Тап шуның һымаҡ, спиртлы эсемлек етештереүҙән файҙа күрәһең икән, үҙеңдең даими "клиенттарыңды" ла үҙең хәстәрлә…**

Хәҙер ябай кеше хаҡында фәлсәфәләп алайыҡ. Ә бит әҙәм балаһы хаталаныусан. Эсергә ярата, тигәс тә, ул бөтөнләйгә кешелектән сыҡҡан, тигәнде аңлатмай бит әле. Ана шул абынған категория кешеләре араһында һәр төрлө һөнәр эйәләре, һәләтле, яҡшы күңелле кешеләр ҙә бихисап. Ситтән ҡарағанда, әлеге айныҭкысҡа килеп эләккәндәр ысынлап та йәл тойола. Етмешенсе йылдар аҙағында беҙгә, медицина институты студенттарына, "халыҡ дружинниги" булып, ана шул айныҭкыстарҙа ла дежур итеү "бәхете" тейә ине. Милиция вәкилдәренә эйәреп, йәйәүләп йә иһә машиналарға тейәлеп, беләктәргә ҡыҙыл сепрәк таҡҡан бер төркөм егеттәр, ҡыҙҙар урам буйлап сығып киткәнебеҙҙе хәтерләйем. Күпселек төнөн йөрөй инек. Беҙҙе етәкләүселәр - милиционерҙар тротуар буйлап бер аҙ "ҡырын тейәп" китеп барған кешене күреп ҡала икән, шунда уҡ машинаны туҡтата һалып, тегеләрҙе ултыртып алып та китә. Бәғзеләрҙең ризаһыҙлыҡ белдерәшлауы - тәбиғи. Әммә яуап итеп милиция сержанты уның "икмәк шүрлегенә" йә иһә күҙ төбөнә ныҡ ҡына эләктереп тә ебәрә. Олпат сержанттың бер иҫеректең башын машинаның стенаһына ҡуша һуҡҡас, тимергә таш шаҡылдап бәрелгән тауыш сыҡҡаны иҫемдә. "Нисек тере ҡалды икән был әҙәм?" тип аптырағайным. Агрессив булған ысын хулигандар, әлбиттә, нығыраҡ татый әлеге ағайҙарҙың йоҙроғон. Әммә, үкенескә, ыҫпай ғына кейенгән, олораҡ йәштәге кешеләргә лә "өлөш" төшкөләй ине шул...

Һуңғы бер-ике тиҫтә йылда, әлбиттә, илдәге тормош бөтөнләйгә тиерлек үҙгәрҙе. Советтар Союзы тигән ил дә, милиция ла юҡ. Бөгөнгө полиция хеҙмәткәрҙәре лә улай түгелдер, моғайын. Хәҙер бит бөтә өлкәлә - магазиндарҙа, почтала, банктарҙа ифрат итәғәтле йәштәр эшләгәнен күрәбеҙ. Хатта әрмелә лә "бабайлыҡ" тигән нәмә бөтөп бара тип ишеткеләйем. Тәртип һаҡлау өлкәһендә лә, моғайын, тәртип барҙыр тип ышанғы килә. Әйткәндәй, урам буйында хәҙер иҫерек йәштәр ҙә һирәгерәк күренә башлаған һымаҡ. Әммә, үкенескә, бәғзе бер оло йәштәрҙәге кешеләрҙең әлегәсә ана шул яман ғәҙәтен ҡуймауы оят, бигерәк оят!..

**Шулай итеп, илебеҙҙә күпләп алкоголь эсемлектәре етештерелгән дәүерҙә, ана шул ағыулы (башҡаса атай алмайым) продукцияны һатып алып эсеүселәр барында һәм шул уҡ ваҡытта хөкүмәтебеҙ тарафынан кешеләрҙе хәстәрләү мәсьәләһе алғы планда торғанда, айныҭкыс тип аталған йорттар, әлбиттә, кәрәк. Әйткәндәй, кешеләр Ислам динен ҡабул итеп, Раббыбыҙға иман килтергәндән һуң, Аллаһы Тәғәлә хәмер эсеүҙең харам булыуы, йәғни ҡәтғи тыйылыуы хаҡында аят төшөрә. Ошо аят хаҡында ишеткәс тә, элек хәмер эскән, әммә Аллаһҡа ныҡ ышанған мосолман халҡы шунда уҡ өйҙәрендә булған бөтә шарап эсемлектәрен урамға сығарып түгә башлаған. Шул ваҡытта урамдарҙағы арыҡтарҙа шарап йылға булып ағып киткәнлеге хаҡында риүәйәт бар. Шуға ла кешеләр алкоголдең оло афәт икәнен үҙҙәре үк аңлап, иманға килмәй тороп, илдә эскелектең дә бөтөүе мөмкин түгелдер. Иң дөрөҫө, халҡыбыҙға бына шундай иман һәм аңлау "айныҭкысы" кәрәк!**

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЯҺАЛМА ҒӘҘӘТЛЕ БУЛМА

**Еңеллек, етешлек көҫәү ихтыяжы һәр тере йәнгә хас тойғолор, сөнки һәр кемебеҙ еңеллеккә анһат ҡына бирелеп бара. Күп ваҡытта яһалма, ваҡытлыса ғына еңеллек ләззәтен татыу өсөн дә, уның ниндәй һөҙөмтәләргә килтеререн уйлап та бирмәй, күҙҙәрҙе йомоп, хистәр ҡосағына ташланабыҙ, йәнәһе, бөгөн йәтеш, рәхәт булһа - булды!**

Ләкин"күктән төшкән" яһалма еңеллек күп осраҡта уйламаған, көтмәгән юғалтыу, ҡайғы-хәсрәттәргә тарыҡтыра әҙәм балаһын. Хайран ҡалырлыҡ: ундай хәлдәр һәр кемебеҙҙең башынан үткән, ләкин беҙ йә фәһем ала белмәйбеҙ, йәиһә белмәмешкә һылтанабыҙ! Яман ғәҙәттәре тоҡомоноң тамырҙарын ҡоротоуы ихтимал икәнен төҫмөрләү генә түгел, аңлай, ләкин үҙен тыя алмай, ихтыяр көсө етмәйҙер, күрәһең. Киреһенсә, үҙ башына яңынан-яңы ғәжәп ғәләмәттәрен уйлап сығарып ҡына тора. Яһалма ғәҙәттәре ҡайғы-хәсрәттәрен еңел кисерергә, арыу-талыуҙарын еңел күтәрергә ярҙам итә, йәнәһе. Аҡыл кешегә үҙен аҙҙырыр, ағыулар өсөн бирелгән, тип уйларһың. Шулай булмаһа, Ер йөҙөнән үҙен ҡырып бөтөрөрлөк яңынан-яңы көслөрәк ҡорал төрҙәре, химик ағыуҙар уйлап табыуын, тере йәндәрҙә тәжрибәләр үткәреүен һәм уларҙы бар әҙәм затын юҡ итерлек күләмдә етештереүен башҡаса нисек аңлатырға була?

Еңеллектә йәшәү ғәйеп түгел, ләкин шып-шыма ерҙә осабыҙға шырау табырға беҙгә ҡуш! Әҙ генә ваҡыт татыулыҡта, именлектә әҙәмсә йәшәй башлаһаҡ, әллә ҡайһы арала осабыҙға яңы сиҡан сығырға әҙер тора. Шул сиҡанды ярһытырға сыпрандап осло шырау эҙләй башлайбыҙ. Шулай түгелме ни?...

**Урал МОСТАФИН.**

✓ *Монгол баҫҡынсылыҡы ҡыпсаҡтарҙың байтағын Волга буйҙарына, Көньяҡ Уралға ҡасып китергә мәжбүр итә. Тап шул осорҙа башҡорттар беләгән ерҙәргә ҡыпсаҡтар күпләп үтеп инә.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ДАЛА УЛДАРЫ - ҠЫПСАҠТАР БЕҘ!



XI-XII быуаттарҙа ҡыпсаҡтар Ҡара диңгеҙ буйҙарына, Төньяҡ Кавказғаса үтеп инә, йыш ҡына рус кенәзлектәренә һөжүм итеп тора. Ҡыпсаҡтар күсеп йөрөгән территория төньякта Яйыҡ йылғаһына, Көньяҡ Урал тарафтарына тиклем барып етә. Әлбиттә, уларҙың бында әүәләрәк килеп төпләнгән башҡорт ҡәбиләләре менән бәйләнештә булыуы шик тыуҙырмай. Ошо боронғо бәйләнештең асыҡ сағылышы - башҡорт теленең дә ҡыпсаҡ телдәре ғаиләһенә карауы.

Монгол баҫҡынсылығы ҡыпсаҡтарҙың байтағын Волга буйҙарына, Көньяҡ Уралға ҡасып китергә мәжбүр итә. Тап шул осорҙа башҡорттар беләгән ерҙәргә ҡыпсаҡтар күпләп үтеп инә. Үҙҙәре лә монгол яуына ҡаршы торған башҡорттар уларҙы бер ниндәй дәғүәһеҙ ҡабул итә. Дәште Ҡыпсаҡтың 1222 - 1230 йылдарҙа монголдар тарафынан тулыһынса яулап алыныуына төрлө сығышлы ҡәбиләләр араһында элек-электән була килгән низағтар, ҡәбилә башлыҡтарының сәйәси амбициялары, тышҡы дошманға ҡаршы берҙәм көрәш алып барыуҙы ойоштороусы көс булмауы төп сәбәп булып тора. Мәсәлән, ҡыпсаҡтарҙың иң көслө ырыуҙарынан һаналған туҡсабалар, нәсәлдәштәре дуруттар менән күп йылдар дауамында дошманлашып йәшәгәнлектән, монгол баҫҡынсылары яғына сыға, ә дуруттар тиңһеҙ алышта тамам ҡыйратыла.

Тарихсы Р.Ғ. Кузеев башҡортлашҡан ҡыпсаҡтарҙың өс ҙур төркөмгә бүленеүен билдәләп үтә. Был төркөмдәрҙең һәр ҡайһыһының үҙенә генә хас тамғалары бар.

Беренсе төркөмгә ҡара ҡыпсаҡ ырыуы вәкилдәре инә. Тарихи әҙәбиәттә был атама шул көйөнсә теркәлгән хәлдә лә ошо ырыу информаторҙары йыш ҡына үҙҙәренең ырыуын ҡарый-ҡыпсаҡ тип атай. Атамаһың ҡарый тигән өлөшө боронғо, төүгө, ҡарт тигән мәғәнәләргә эйә. Тикшеренеүсе А.Н. Кононов "Коркут атам китабы"на иҫкәрмәләрендә боронғо төркиҙәрҙә "кара" һүҙенең ҡара төҫтө белдереүенән башҡа "насар", "яман", "төньяҡ", "ҙур", "көслө", "баш" мәғәнәләрендә ҡулланылыуына иғтибар иткән. Ошолайыраҡ фекер итһәк, ҡара ҡыпсаҡ (ҡарый-ҡыпсаҡ) атамаһының көслө, ғәйрәтле, күп һанлы ҡыпсаҡ мәғәнәһендә ҡулланыла башлауын ҡуҙаллап була. Ҡара ҡыпсаҡ этнонимы ҡырым татарҙарында, синьцзян ҡырғыҙҙарында, ҡаҙаҡтарҙа ла бар, һуңғыларының составында улар киң таралған һәм иң күп һанлы ырыуҙарҙың береһе булып иҫәпләнә. Ҡара ҡыпсаҡтарҙың сарыш, аслы, сайҡан исемле ырыу бүлемдәре бар.

Ҡара ҡыпсаҡтарҙың атабабалары тураһындағы мәғлүмәттәр дөйөм уғыҙ-ҡыпсаҡ риүәйәттәренә хас сюжеттар аша бирелә. Башҡорт шәжәрәләрендә Ҡыпсаҡ хандың Уғыҙ бей тарафынан уллыҡҡа алыныуы, Итиль йылғаһы буйындағы ерҙәрҙе яулап алырға ебәрелеүе хаҡында бәйән ителә. Башҡорт ҡыпсаҡтарының төп бабаһы - Ҡыпсаҡ хандың улы Лач (Лаж) бей, Лач бейҙең улы Ҡолһары бей ҡарый-ҡыпсаҡтарҙың өс түбәһенең атаһы булып, башҡа ҡыпсаҡ нәҫелдәре уның икенсе улы Алмай бейҙән таралған. Ике вертикаль һыҙыҡтан торған ҡабырға тамға төп ҡара ҡыпсаҡ тамғаһы булып тора.

Ҡыпсаҡтарҙың икенсе төркөмөнә ҡарағай-ҡыпсаҡ, гәрәй-ҡыпсаҡ (төп тамғалары - ҡапҡа тамға), сәнкем-ҡыпсаҡ, бошман-ҡыпсаҡ, һыуын-ҡыпсаҡ (улар һәнәк тамғаны ла ҡулланған) исемле ырыу бүлемдәре инә. Башҡорт риүәйәттәрендә бошман-ҡыпсаҡтарҙың төп бабаһы итеп легендар Бошман (Бачман) бей күрһәтелә. Ул ҡыпсаҡтарҙың олбурлик (илбари) ҡәбиләһе юлбашсыһы булып, Итиль (Волга) йылғаһы буйында монгол-татар баҫҡынсыларына ауыһыҙ ҡаршылыҡ күрһәтә, әммә әсиргә алынып, Менгу ҡаған тарафынан язалап үлтерелә. Бошмандың иҫән ҡалған ырыуҙаштарының бер өлөшө Көньяҡ Уралға табан ҡасып китеп, башҡорттарға килеп ҡушыла. Бошманлы ҡыпсаҡтарҙың хәҙерге татар этносы формалашыуында ла ҡатнашыуы ҡуҙаллана, шулай уҡ ҡырғыҙҙарҙың азык ҡәбиләһе составында һәм ҡаҙаҡтарҙың кунграт ырыуына ҡараған бушман исемле этник төркөмдәр билдәле.

Гәрәй-ҡыпсаҡтарҙың тамғалары кунграт һәм кереит ҡәбиләләре тамғалары менән бер иш. Монголдарға тиклем уҡ Ҡытай сигендә кереит берләшмәһе була, әммә ул XIII быуат башында монголдар тарафынан яулап алына. Күрәһең, артабан улар монгол ғәскәре хәрәкәтендә ҡатнашып, ахырҙа ҡайһы бер төрки этностары составына инеп китә. Ошо этноним үзбәк, ҡырғыҙ һәм ҡаҙаҡ халыҡтарында осрай. XVII быуатта монголдар составында ла кирәй ырыуы булғанлығы билдәле. Башҡорттарҙағы гәрәй-ҡыпсаҡ, кирәй, гәрә этнонимдары, ҡырым татарҙары составындағы герей ырыуы атамаһы ошо урта быуаттарҙағы кереиттарҙың хәҙерге варисҭары иҡәнлегенә бер ишара булғандай. Бында беҙ XIII - XIV быуаттарҙа монгол сығышлы кунграттар һәм төрки киреиттарҙың ҡыпсаҡтар менән булған тығыҙ бәйләнешен ҡуҙаллай алабыҙ.

Башҡорт ҡыпсаҡтарының өсөнсө төркөмөнә аҡ ҡыпсаҡтар, йә иһә төркмән-ҡыпсаҡтар инә. Ғөмүмән, башҡорт ырыуҙары бүлемдәре араһында төркмән этнонимы йыш осрай. Быны башҡорттарҙың хәҙер беҙ төркмән, тип атаған халыҡ менән бәйләп аңлатыу бигүк дөрөҫ булмаҫ ине. Төркмән этнонимы шулай уҡ ноғайҙар һәм үзбәктәрҙә лә осрай. Әммә беҙ XVI - XVIII быуаттарҙа башҡорттар менән башҡа бер халыҡтарҙың, мәсәлән, ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар, ҡалмыҡтарҙың аралашыуын дәлилләүсе документтарҙы таба алһаҡ та, башҡорт-төркмән бәйләнештәре хаҡында ошоно уҡ раҫлай алмайбыҙ. Күрәһең, башҡорттарҙың этник составында ошо этноним менән бәйле элементтарҙың хасил булыуы боронғораҡ осорға ҡарай.

Ғәрәп сығанаҡтарында "төркмән" һүҙе тәү башлап X быуатта географ әл Муккаддаси яҙмаларында осрай, ул был исем менән Һырдаръя уғыҙҙарын атай. Билдәле булыуынса, Ислам динен ҡабул иткән төркиҙәр үҙҙәрен төркмән, тип атай башлай. Бохара һәм Сәмәрҡәнд өлкәләрендә йәшәүсе бәгзе бер үзбәктәр үҙҙәрен төркмән тип иҫәпләй. Бында монгол яуынан бик күпкә алдараҡ көн иткән уғыҙҙар XII быуатта көнбайышҡа, Амударъя буйҙарына, унан Каспий аръяғына йүнәлә. Әммә фәкир йәшәгән Һырдаръя уғыҙҙарының бер ни тиклеме карлуктарға ҡушыла, Нуратауҙа көн итеп, үҙҙәрен төркмән, тип таный. Улар артабан монгол баҫҡынсылығына дусар ителеп, көнбайышҡа йүнәлтелгән дөйөм хәрәкәткә ҡушылырға мәжбүр була. Ошо осорҙа, бигерәк тә Алтын Урҙа хакимлығы осоронда, улар ҡыпсаҡтар менән тығыҙ бәйләнешкә инә. Төркмәндәрҙең Аҡман һәм Ҡараман исемле юлбашсыларының исемдәре ҡайһы бер башҡорт шәжәрәләрендә лә осрай. Легендар Уғыҙ хандың 6-сы улының исеме Тағ булып, уның нәҫелдәре үҙҙәренә таҡ, тау, таулы автонимдарын ала. Мәсәлән, башҡорт ырыу атамалары бүлемдәренең 25-е ошо тау тамыры менән бәйле, быңдай этнонимдар шулай уҡ төркмәндәрҙә, ҡарағалпаҡтарҙа, үзбәктәрҙә йыш осрай. Башҡорт төркмән-ҡыпсаҡтарының төп тамғаһы ла - һуйыр аяҡ йәки ҡаҙаяҡ - үрҙә аталып киткән халыҡтарҙың ошондай уҡ "төркмән" тамғаһы менән бер иш.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне. (Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

**Инеш һүҙ**

Телебеҙҙә тәү замандарҙан, кешелек телдәре барлыҡҡа килгән архаик дәүерҙәрҙән бирле менәрләгән һүҙҙәр йәшәп килә. Әлбиттә, һүҙ - һүҙ инде, уның яҡшыһы йә яманы юҡ. Улар аңыбыҙҙа донъя сағылышы булып ярала. Әммә ошо һүҙҙәрҙең береһе - һуғыш тип аталғаны - кешеләргә мең йылдар элегерәк нисек ауыр тәьҫир итһә, ул һаман да шулай булып ҡала. Был һүҙҙең яңғырашынан уҡ хәүеф-хәтәр тойолғандай була, әйтерһең, ул тик ғүмергә бөтмәслек аһ-зарҙарҙан, үлемесле яраланғандарҙың ыңғырашыуҙарынан, бала-саға илауынан, ҡатын-ҡыҙ иңрәүенән укмашкан бер ҡурҡыныс нәмә. Ни эшләйһең - нисек кенә ҡыҙғаныс булмаһын, кешелек тарихы һис ахыры булмаған ҡан ҡойоштан әлегә тиклем азат түгел әле.

Уҙып киткән XX быуат та Рәсәй тарихын миллионлаған ябай һәм хатта затлы, тип иҫәпләнгән аристократик ҡатлам кешеләренең ал ҡанына мансылдырҙы. Бер-бер артлы тоҡанып торған япон һуғышы, Беренсе Бөтөн донъя һуғышы, 1918 - 1922 йылдарҙағы Граждандар һуғышы мәхшәре, фин һуғышы һәм 4 йыл рәттән барған үлемесле Бөйөк Ватан һуғышы ил тәнендәге уңалмаҫлыҡ яралары, быға һаса күрелмәгән етемлек ғазаптары, әсәләрҙең, ҡатын-ҡыҙҙарҙың күҙ йәштәре, емереклек һәм һуғыш килтергән фәҡирлек менән тарих биттәренә ҡуша яҙылып барған.

Һуғыштарҙың да төрлөһө була. Ил азатлығы, Ватанды һәм ғәзиз еребеҙҙе баҫҡынсы дошмандан һаҡлау өсөн йәндәрен фиҙа ҡылғандар баҡыйлыҡҡа изге шәһит булып күсте, уларҙың ҡаһарманлығы хаҡында йыр-бәйеттәр, легендалар сығарылған, әллә күпме әҙәби әҫәрҙәр ижад ителгән. Етеп килгән 2020 йылда беҙ һуңғы Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығын билдәләп, тарихи хәтеребеҙҙе яңыртасаҡбыҙ. Ир-азаматтар үҙҙәре һәләк булһа ла, бөтмәҫ дандары ҡалды. Беҙҙең олатайҙарыбыҙ, бабайҙарыбыҙ, атайҙарыбыҙ быуынына төштө шундай яҙмыш. Улар - үлемһеҙ быуын, батырҙар тарихы һис бер онотолмаҫ.

Батыр башҡорт яугирҙарының СССР - Рәсәй тарихындағы ҡабатланмаҫ ватансылыҡ һәм героизм өлгөһө - 112-се (16-сы Черниговская) Ленин, Ҡыҙыл Байраҡ, Суворов һәм Кутузов орденлы Башҡорт гвардия атлы дивизияһы. Башҡорт атлылары тарихын өйрәнеү һәм һаҡлау, уны киләсәк быуындарға тапшыра барыу - яуҙарҙа һәләк булғандарҙың рухына һәм хәтеренә тоғро ҡалыу маҡсатында башҡарыла торған сауаплы эштер. 112-се Башҡорт атлы дивизияһы һәм уның батыр яугирҙары хаҡында байтаҡ тарихи мәғлүмәттәр тупланған, мәҡәләләр яҙылған, китаптар сығарылған. Әйҙәгеҙ, туғандар, улар хаҡындағы хәтеребеҙҙе яңыртып, баҡыйлыҡҡа ашҡан ырыуҙаштарыбыҙҙы, ватандаштарыбыҙҙы тағы ла бер тапҡыр иҫкә алайыҡ. Тап ошо маҡсатта гәзитебеҙ биттәрендә **112-се Башҡорт атлы дивизияһының тарихи хроникаһын** сағылдырған төрлө мәғлүмәттәрҙе барлап, махсус рубрикабыҙҙа баҫа башлайбыҙ. Дивизия яугирҙары хаҡында материалдарығыҙ булһа, һеҙҙән дә хаттар көтәбеҙ.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне. (Дауамы бар).**

# БЕРЕНСЕ

## беренсе булырға

### *ЗАРИФ БАЙҒУСҠАРОВ:*

*Атайым бер саҡ: "Ҡартатайың, беҙҙең Байғусҡаровтарҙан бер кеше сығасаҡ, тигәйне. Шул кеше һин булырһың инде", - тигәйне. Ҡартатайым Ырымбурҙа Ҡарғалы ауылында уҡып ҡайтҡас, биш ауылға мулла булып торған. Мин йәй көнө донъяға килгәндә ҡартатайым ныҡ ауырыған булған. Мине күтәргән дә, исем ҡушҡан. Ғүмерендә иң һуңғы исемде лә миңә ҡушҡан һәм атайыма: "Изгелек күрһәң, ошо балаңдан күрерһең", - тигән.*

**Тормошта үҙ алдына ҡуйған маҡсатына эҙмә-эҙлекле алып барыусы, принципиаль ҡарашлы, тура һүҙле, объектив, заман ҡуйған проблемалар хаҡында ҡыйыу фекер йөрөтөүсе, республикабыҙҙы, милләтебеҙҙе ҡайнар һөйгән, күп изге эштәр башҡарған шәхес, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Закир улы БАЙҒУСҠАРОВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ был рубрикала.**



**Зариф Закир улы, шундай бер бәхәсле әйтем бар: "Баланды тәрбиәләмә, үҙенде тәрбиәлә: үҫеп еткәс, ул барыбер үҙеңә оҡшаясаҡ". Был әйтемгә ҡарата фекерегеҙ нисек? Ғөмүмән, үҙегеҙ атайығыҙҙан ниндәй тәрбиә алдығыҙ?**

- Мин был фекер менән тулыһынса килешеп бөтмәйем, сөнки мин аталары яҡшы булып та, балаларының уларҙың киреһе булған миҫалдарҙы күп беләм. Тәрбиәне бөтөнләй инҡар итергә ярамай. Беҙҙең халыҡта тағы ла бер әйтем бар: "Инә бүре нисек олоһа, көсөгө лә шулай олой". Бында тәрбиәлә әсәйҙең йоғонтоһо хаҡында һүҙ бара. Һеҙ килтергән фекер ниндәйҙер айырым осраҡ өсөн тап килеүе лә бар, әммә һәр саҡта ла түгел.

Атайымдың әйткән һүҙҙәре һәр ваҡыт иҫемдә, ҡолағымда сыңлап тора. Әммә мин бар йәһәттән дә атайыма оҡшарға тырышманым. Ни өсөн тигәндә, атайҙарҙың һәр бер ҡылығы ла дөрөҫ булмауы бар. Атайым үҙе әйтеүе буйынса, ун һигеҙ йәшенән тәмәке тарта башлаған. Ғүмер буйы тартты. Мин иһә ғүмерҙә лә тәмәкене ауыҙыма алып та ҡарағаным булманы. Шуға күрә был яғынан мин атайыма оҡшағанмын тип әйтә алмайым. Әлбиттә, мине тәрбиәләүҙә уның йоғонтоһо бик ҙур булды. Уның: "Улым, кешене бер ҡасан да илатма, кешенекенә теймә", - тигән һүҙҙәре һәр ваҡыт хәтеремдә. Мин бер ваҡытта ла кешенекенә ҡул һонғаным юҡ, шул уҡ ваҡытта үҙемдекен дә бирмәйем. Тағы ла: "Ауыҙың тулы ҡара ҡан булһа ла, кеше алдында төкөрмә", - тигән һүҙҙәрен дә онотмайым. Нисек кенә ауыр булһа ла, зарланмайым, танауымды төшөрмәйем. Атайым бер саҡ: "Ҡартатайың, беҙҙең Байғусҡаровтарҙан бер кеше сығасаҡ, тигәйне. Шул кеше һин булырһың инде", - тигәйне. Ҡартатайым Ырымбурҙа Ҡарғалы ауылында уҡып ҡайтҡас, биш ауылға мулла булып торған. Мин йәй көнө донъяға килгәндә ҡартатайым ныҡ ауырыған булған. Мине күтәргән дә, исем ҡушҡан. Ғүмерендә иң һуңғы исемде лә миңә ҡушҡан һәм атайыма: "Изгелек күрһәң, ошо балаңдан күрерһең", - тигән.

**Атайығыҙҙың исеме Закир, һеҙҙеке Зариф. Ғөмүмән, улына исемде атаһына, ҡыҙына әсәһенә оҡшатып ҡушыу ҙа юҡтан ғына килмәгәндер инде. Шулай бит?**

- Ни өсөн миңә Зариф тип исем ҡушҡандарын белмәйем. Атайым иртә донъя ҡуйҙы, ул саҡта һорарға ла сәбәп булмағандыр. Күрше ауылда атайымдың Зариф тигән дуҫы ла бар ине. Кем белә, бәлки, шуның хөрмәтенә миңә ошо исемде ҡушҡандарҙыр.

**Атайығыҙға бәйле тағы ла ниндәй бала саҡ хәтирәләре менән уртаҡлашыр инегеҙ?**

- Атайым уҡырға ярата. Көтөү көткәндә һәр ваҡыт үҙе менән "Ағиҙел" журналын йөрөттө. Миңә күп кенә тарихи урындар хаҡында һөйләне. Үҙем иҫ белгәндән башлап, дүрт йәшемдән һыбай йөрөнөм, атайыма йылҡы, һыйыр көтөштөм. Беҙҙең колхоз ере ауылыбыҙҙан 40 саҡрымдай алыҫлыҡтағы Ямантауҙа ине. Яҙ көнө атайым мәрхүм менән атҡа арба егеп алып, көтөүҙе шунда ҡыуабыҙ. Аҙна буйы ағас будкала йәшәп, мал көтәбеҙ. Үҙебеҙ ашарға бешерәбеҙ, үҙ йүнебеҙҙе үҙебеҙ күрәбеҙ. Балыҡ та тотабыҙ. Төндәрен ҡыуышыбыҙ янына айыу килә торғайны. Атайым миңә: "Айыу кешегә теймәй ул, һин унан ҡурҡма. Беҙ уның биләмәһенә килгәнбеҙ, шуға ризаһыҙлығын белдерә. Иң ҡурҡынысы ике аяҡлы хайуан. Кешенән генә ҡурҡырға кәрәк", - тип әйтер ине. Айыу нығыраҡ тынғыһыҙлай башлаһа, мылтығын алып сығып, һауаға атһа, тайыш табан табанын ялтырата торғайны. Аҙна үтеүгә, икенсе көтөүсе килеүгә ауылға ҡайтабыҙ. Май айында мәктәптәрҙә уҡыуҙар тамаланғандан алып август аҙағына тиклем мин шулай атайым менән бергә йөрөйөм.

**Мәшһүр шағирыбыҙ Рәйес Түләк үҙенең "Яныу" поэмаһында көтөү көткәндә ваҡыт туҡтап ҡалыуы хаҡында әйтеп үтә:**

*Дошманыңа теләмәҫлек теләк:*
*Әгәр көтһәң һарыҡ көтөүен -*
*Һин көтмә лә юлдар ҡыҫҡарыуын,*
*Һин көтмә лә ваҡыт үтеүен.*
*Һин ашыҡһаң, тиҙлек әкренәйә,*
*Ваҡыт әкренәйә, ул туҡтай.*
*Ана, ваҡыт өйөр артындағы*
*Сатан һарыҡ булып һылтыҡлай.*

**Мин үҙем дә көтөү көткән кеше булараҡ, ваҡыттың үтмәүен һиҙә инем. Һеҙгә нисек тойолдо был кисереш?**

- Мин, киреһенсә, урманда йәшәүҙән, атта һыбай йөрөүҙән ҙур ҡәнәғәтлек ала торғайным. Төрлө йәнлектәр менән аралашыу, ашарға бешереү, тәбиғәт биргән ризыҡ менән туҡланыу, балыҡ мәскәүләү - былар барыһы ла ғүмеремә күңелемә һеңеп ҡалды. Миңә көтөүҙә, киреһенсә, ваҡыт етмәне кеүек.

**Атайығыҙ һеҙҙең киләсәгегеҙҙе нисек күрҙе һәм уның хыялдары тормошҡа ашты-мы?**

- Атайымдың хыялдары тормошҡа ашҡандыр тип уйлайым. Ул миңә: "Әгәр ҙә уҡымаһаң, бына минең һымаҡ көтөү көтәрһең йә тракторсы булып йөрөрһөң. Уҡыһаң, кеше булырһың. Үҙең ҡара. Әгәр ҙә минең һымаҡ көтөү көткөң килһә, уҡыма", - ти торғайны. Атайымдың бер ҡасан да мин уҡыған мәктәпкә килгәнен хәтерләмәйем. Шулай уҡ мин алған билдәләр менән дә ҡыҙыҡһынманы. "Нисек уҡыйһың?" тип һорағанын да иҫләмәйем. Әле ауылда атайымдың йәштәштәре иҫән-һау. Әгәр ҙә ул бөгөн иҫән булһа, минең менән риза булыр, ҡыуаныр ине тип уйлайым. Атайым тура һүҙле булды. Совет осоронда пропаганда эше бик киҫкен ҡуйылды. Исмәғил Әхмәҙулла улы Ғәбитов беҙҙең ауылға килгән дә кәңәшмәлә бер кешенең депутатлыҡҡа кандидат булып күрһәтелеүен, шуға ауыл халҡының тауыш биреүен һораған. Атайым торған да: "Беҙ һеҙ тәҡдим иткән кешене белмәйбеҙ, күргәнебеҙ ҙә юҡ. Иң тәүҙә килһен, күренһен, ҡарап ҡарайыҡ", - тип әйткән. Исмәғил Әхмәҙулла улы атайымдың ошо һүҙҙәрен йыш иҫкә төшөрә.

**Атаһының улы Зариф Закир улы шулай уҡ тура һүҙле бит. Шулай түгелме? Тураһын әйтеүе ҡыйын түгелме?**

- Был холҡом атайымдан мираҫ булып ҡалғандыр тип уйлайым. Әлбиттә, тура һүҙлеләргә йәшәүе ауырыраҡ. Сөнки тураһын әйткән башҡаларға ғына түгел, хатта туғанына ла ярамай.

**"Урал батыр" эпосында "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ!" тигән йәшәү принцибы борон-борондан халҡыбыҙҙың йәшәү принцибына әүерелгән. Әммә беҙ шундай заманда йәшәйбеҙ, заманға тиң йәшәр өсөн был принцип халҡыбыҙға ҡамасаулағанын да тоябыҙ. Ни өсөн тигәндә, тик яҡшылыҡ менән генә еңеп булмаған ҡаршылыҡтар, проблемалар була. Һеҙ бына ошондай ҡапма-ҡаршылыҡты тойғаныгыҙ бармы? Беҙҙең тәрбиә, тарихи менталитет шундай формалашҡан, ә донъя бөтөнләй башҡаса. Шулай түгелме?**

- Мин был фекерегеҙ менән килешәм. Яңыраҡ магазинға ингәйнем, эргәмә бер ағай килде. Башҡортса һөйләшә. Бактиһәң, уның малайы беҙҙә эшләп киткән икән. Беҙҙең арала шундай һөйләшеү булды. Һүҙҙе ағай башланы:

- Һеҙ малайымды ныҡ эшләттегеҙ, әммә уның эш хаҡы түбән булды. Һеҙ уны әрләнегеҙ, ярҙам итмәнегеҙ, - тип дәғүәләрен белдерә башланы.

- Һеҙ башҡорттар әҙерәк эшләргә тейеш, тип уйлағайнығыҙмы? Миңә ҡалһа, улар башҡаларға ҡарағанда нығыраҡ эшләргә тейеш, - тинем уны бүлеп.

- Һеҙ, барыбер ҙә, үҙегеҙ башҡорт була тороп, улыма ярҙам итмәнегеҙ, - ти ағай һаман да үҙ һүҙен өҫкә сығарырға теләп.

- Хәтерләйһегеҙме, мин Мәскәүгә барып юллап, уға өс бүлмәле фатир алышып бирҙем, - тинем ағайҙың хәтерен яңыртырға теләп.

- Эйе, һеҙ бит бөтәһенә лә фатир алырға ярҙам иттегеҙ, - ти был ағай һаман да үҙ туғыҙын туғыҙ итергә тырышып.

- Юҡ, мин быны барыһына ла эшләмәнем. Өфөлә фатирлы булыу барыһына ла тәтемәй ул...

- Фатир алыу ерунда ул, һеҙ уны барыбер әрләп эшләткәнһегеҙ. Һеҙ үҙегеҙ башҡорт булғас, үҙ башҡортоғоҙҙо әрләргә тейеш түгелһегеҙ...

Был ағай менән уртаҡ тел таба алманыҡ. Ахыр сиктә, уның янынан китеп барырға тура килде. Үкенескә күрә, бына ошондай хәлдәр ҙә булып тора.

Тағы ла бер миҫал тураһында һөйләмәй булдыра алмайым. 55 йәштәр самаһындағы бер апай килде миңә. Район хакимиәте аша әсәһенә кер

✓ *Баймаҡта ит эшкәртеү комбинатын төҙөгәйнеләр. Ул әҙ генә эшләне лә, туҡтаны. Ит тапшырыусы юҡлыҡҡа һылтандылар. Был төбәктә иң күп мал аҫраусылар йәшәгәнлеген иҫкә төшөргәндә, был һүҙҙәрҙең хаҡлығы шик тыуҙыра.*

# БУЛҒАНБЫҘ...

## тейешбеҙ

йыуыу машинаһы алып биреүҙе һорай. Мин унан: "Ә әсәйегеҙҙең балалары юҡмы?"- тип һорайым. "Бар, беҙ ғаиләлә алты бала үҫтек", - ти был. "Шул алты балаһы йыйылышып ул машинаны әсәйегеҙгә алып бирә алмайһығыҙмы һуң?" - тием уға. "Беҙ ней алып бирә алабыҙ, әммә дәүләт алып бирһә, яҡшыраҡ була бит", - ти апай күҙен дә йоммай.

Мин шуға аптырайым: нисек инде алты бала үҙҙәренең бер әсәһен ҡарай алмай? Быны аңларға минең башым етмәй.

Тағы ла бер һуғыш ветеранының ҡыҙы килеп, аталарына шифаханаға путевка юллап алып биреүемде үтенде. Беҙҙең арала шундай һөйләшеү булды:

- Атайығыҙҙың пенсияһы 70 мең тирәһе бар бит?
- 68 мең...
- Ә атайығыҙҙың пенсияһын кем ала?
- Мин...
- Ә атайығыҙ фатир алдымы?
- Алды, район үҙәгендә...
- Ул фатирҙа кем йәшәй?
- Минең улым...
- Һеҙгә оят түгелме? Атайығыҙ һеҙгә фатир алып биргән. Өҫтәүенә, айына 68 мең һум аҡсаһы килеп тора. Шул аҡсаның яртыһын ғына алып атайығыҙҙы шифаханаға ебәрә алаһығыҙ бит, шулаймы?
- Мин аңланым һеҙҙе...

Шулай тине лә был ҡатын сығып китте. Ҡыҙғаныс, һуғыш ветераны булған аталарын, ҡартаталарын үҙҙәренә файҙа булһын өсөн генә йөрөтөүсе балалар бар. Үҙҙәре өсөн алған фатирҙарында йәшәүсе ветерандар бик һирәк. Мин бындай кешеләрҙе аңламайым.

▸ **Ауылдарҙы һаҡлау мәсьәләһе бөгөн демографик, тимәк, стратегетик мәсьәлә булараҡ, дәүләт тарафынан хәл ителергә тейеш. Һәр заманда, һәр дәүләттә ауыл илде кеше ресурстары менән тулыландырған. Хәҙерге көндә иһә ауылдарҙы һаҡлау иң беренсе нәүбәттә иҡтисади мәсьәлә. Шулай бит?**

- Демография мәсьәләһенә килгәндә һеҙҙең менән килешәм: ауылдарҙа балалар һәр ваҡыт күпләп тыуҙы. Бына беҙҙең ғаиләлә биш бала булды. Ауылыбыҙҙа дүрт баланан да кәм ғаиләләр булманы. Шул уҡ ваҡытта дәүләт тарафынан ауылға иғтибар бөтөнләй юҡ тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ. Фермерҙарға дәүләт ярҙам итергә әҙер. Әммә фермерҙарҙың барыһы ла тиерлек ауылдарҙа эшләрлек кешеләрҙең ҡалмауы хаҡында борсола. Ауылда эш юҡ, тигән һүҙ һылтау ғына, тиҙәр фермерҙар. Хәйбуллала бер фермер дәүләт ярҙамы менән өс комбайн алған. Ауылдарында егерме бишләп эшләрлек йәштәге егеттәр бар икән. Баҡтиһәң, шул егеттәрҙең береһе лә иртә таңдан төнгә тиклем эшләгеһе килмәй. Шунан был фермер башҡа райондан ике егетте алып килеп, шуларҙы йәй буйы эшләтеп, 120-шәр мең хеҙмәт хаҡы түләгән. Шуға күрә, ауылда эш юҡ, тигән фекер менән килешмәйем.

Рәсәйҙең башҡа өлкәләре менән сағыштырғанда беҙҙең ауылдарҙа кеше күберәк йәшәй. Әгәр ҙә Рәсәйҙә 28 процент тирәһе халыҡ ауылда йәшәһә, беҙҙәге нисбәт 38 процент тирәһе. 2020 йылдың 1 ғинуарынан беҙҙә "Ауыл биләмәһен үҫтереү" программаһы эшләй башлаясаҡ. Был программаға ярашлы ауылдарға юл һалыу, газ үткәреү, өй төҙөү өсөн 3 процентҡа тиклем ипотекаға аҡса бүленәсәк.

Минең барлыҡ туғандарым ауылда йәшәй. Улар ябай хеҙмәтсәндәр. Ейәнсура районында булғанда бер кеше менән таныштым. Уның өс бейәһе, иллеләп һарығы бар. Ул һәр көҙҙә өс тай һатып, 120 мең һум аҡса эшләй. Өҫтәүенә, һарыҡтан ғына 20-30 мең һум килем килә. Ҡыҫҡаһы, уға йылына өҫтәмә рәүештә көмөндә 150 мең самаһы аҡса килеп тора. Тағы ла бер кеше ҡыш көнө һарыҡтарҙы килешеү буйынса алты ай ҡарай ҙа, 20 процентын ҡараған өсөн үҙенә алып ҡалып, ҡалғанын хужаһына ҡайтара. Улар ҡатыны менән икеһе генә был һарыҡтарҙы ҡарай, саф килемдәре 200 мең самаһы тәшкил итә. Ауыл ере өсөн 200 мең һум да ҙур аҡса, айына 35-әр мең килеп сыға. Шул уҡ ваҡытта бындай эш менән шөғөлләнергә теләүселәр бик һирәк икән. Элек мал көтөүлектәре, сабынлыҡтар бик наҡыҫ булды. Хәҙер тотош болонлоҡтар сабылмай ҡалһа ла, эшләргә теләгән кеше бик һирәк. Ауылда йәшәп тә, һыйыр торорға йыбаныусылар күбәйҙе. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, кеше хәҙер ауылда ни өсөн эшләргә теләмәй һуң?

▸ **Совет заманында кешене мәжбүр итеп эшләтеү механизмдары бар ине. Хатта "Әрәмтамаҡлыҡ өсөн" тигән статья ла булды.**

- Минә хатта эшләргә теләмәүселәрҙе төрмәгә ултыртайыҡ, тип тәҡдим әйткәндәре булды. Мин бындай аҙымға барыуға ҡаршы. Кешене эшләргә теләмәгәне өсөн генә төрмәгә ултыртыу дөрөҫ түгел. Минеңсә, кеше асығһа, мәжбүри рәүештә үҙе эшләйәсәк. Улар эшләргә теләмәй, сөнки ас түгелдәр. Күптәр кеше эш булмағаны өсөн эсә, тиҙәр. Шундай һорау: эше булмаһа ла, ул бит араҡыға аҡса таба. Эшләмәгәс, араҡыға ҡайҙан аҡса таба һуң? Шуға күрә эш булыу-булмау менән эскелек араһында бер ниндәй ҙә бәйләнеш юҡ. Беҙҙә эскелек һәм суицид осраҡтарының иң күбе Себерҙә күҙәтелә. Ниңә, Себерҙә эш юҡ тип әйтмәксе булаһығыҙмы? Бындай осраҡтарҙың иң әҙе Кавказда, Урта Азияла, ә ул яҡтарҙа эш күп тип уйлайһығыҙмы улай булғас? Үзбәктәр беҙгә килеп иң аҙ түләнгән иң ҡара эштә эшләргә лә әҙер...

▸ **Һуңғы йылдарҙа Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил райондарында йөрөгәндә бер күренешкә шаһит булдым. Татарстан яғынан килеп, күпләп йылҡы, һыйыр, һарыҡ малдары һатып алалар. Бер яҡтан ҡарағанда, үҫтергән малды һатыу проблемаһы хәл ителгән һымаҡ, шул уҡ ваҡытта ауылдарыбыҙ яйлап башҡаларға сеймал сығанағына әйләнеп барған һымаҡ. Был проблеманы беләһегеҙме?**

- Беләм, әлбиттә. Баймаҡта ит эшкәртеү комбинатын төҙөгәйнеләр. Ул әҙ генә эшләне лә, туҡтаны. Һорашҡайным, ит тапшырыусы юҡлыҡҡа һылтандылар. Был төбәктә иң күп мал аҫраусылар йәшәгәнлеген иҫкә төшөргәндә, был һүҙҙәрҙең хаҡлығы шик тыуҙыра.

Эйе, беҙҙең яҡта ит татлы, сөнки малдың ейгән ризығы - үлән сифатлы, ул ҡылғанға бәйле. Ҡымыҙ ҙа был төбәктә иң сифатлыһы һанала. Беҙҙең малдарҙы күпләп һатып алыусылар үҙҙәренә файҙаһы булмаһа, был эш менән шөғөлләнмәҫ инеләр. Улар беҙҙән алған малды һимертеп һатып, табыш ала. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең магазиндарҙа ҡаҡланған ит, ҡаҙылыҡ һатылмай. Беҙ Өфөлә Түбәнге Новгородтан, Татарстандан, Удмуртиянан килтерелгән ҡаҙылыҡты һатып алабыҙ. Беҙ йылҡы һаны буйынса Рәсәйҙә Алтайҙан ҡала икенсе урындабыҙ, әммә беҙҙә "Ҡаҙылыҡ" тигән махсус магазин һаман юҡ. Барлыҡ сәбәптәр үҙебеҙҙә.

▸ **Туған телде уҡытыу мәсьәләһе. Хәҙер балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре бар, айырым башҡорт балалар баҡсалары ла барлыҡҡа килде. Башҡорт гимназияларында туған тел, башҡа мәктәптәрҙә дәүләт теле булараҡ башҡорт теле уҡытыла. Әммә урам үҙ эшен эшләй ҙә ҡуя. Хатта тик башҡорттар ғына йәшәгән ауылдарҙа ла балалар урамда дөйөм аралашыу телендә һөйләшә. Шуға күрә туған телде уҡытыу икенсе бер ҙур мәсьәләнең хәл ителеүен талап итә: йәғни туған телдә аралашҡан мөхит булдырыу. Әгәр ҙә ауылда ундай мөхитте ойоштором тиһәң, баланың ата-әсәһе ауылда йәшәргә, эшләргә тейеш. Тимәк, туған телдә уҡытыу рухи мәсьәлә генә түгел, иҡтисади мәсьәлә лә. Был йәһәттән һеҙҙең ниндәй фекерҙәрегеҙ бар?**

- Беҙҙә һәр ваҡыт мәктәпте, уҡытыусыны ғәйепләйҙәр. Ул төптән дөрөҫ түгел. Әгәр ҙә ғаиләлә туған тел мөхите юҡ икән, бер бала ла башҡортса һөйләшмәйәсәк. Беҙ, мәҫәлән, үҙебеҙҙең ғаиләлә тик башҡортса аралашабыҙ. Гөлсәр ҡыҙым 39-сы мәктәптә уҡыны һәм ул мәктәптә башҡорт теле өйрәнелмәй. Ул хәҙер башҡортса һөйләшеп кенә ҡалмай, йырлай ҙа, башҡортса бер хатаһыҙ яҙа.

▸ **Тыуған ауылығыҙға ҡайтып йөрөйһөгөҙмө?**

- Күгәрсен районындағы тыуған ауылым Ҡалмаҡта егермеләп кенә өй ҡалған. Алдағы йыл унда "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы үткәрергә уйлайбыҙ. Ауылға илтеүсе юлдарҙы рәтләнек, зыяратты кәртәләнек. Мин буш торған бер өйҙө һатып алдым да, уны һүтеп, урынына бәләкәй генә ағас өй һалып ятам. Әлбиттә, мин унда ҡайтып йәшәргә йыйынмайым. Бәлки, башҡалар ҙа минең өлгөгә эйәрер тип өмөтләнәм. Һәр кеше үҙенең тыуған ауылына ҡайтып, бер өйҙө генә матурлаһа ла, ауылдың йөҙө үҙгәрәсәк һәм ул ауыл бөтмәйәсәк. Алдағы йыл ауыл урамына электр лампалары ҡуйырға уйлайбыҙ. Әле ауылымда тағы ла дүрт яңы йорт һалынып ята, тимәк, минең өлгөгә эйәреүселәр табылды.

▸ **Тажик фәйләсүфе Саҙритдин Айни "Киләсәкте яҡтыртыр өсөн үткәндең көлөнән ҡуҙ эҙләйем" тигән. Ошо күҙлектән ҡарағанда хәҙерге заман башҡорто тарихтағы башҡорттан айырмалы рәүештә ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш тип уйлайһығыҙ?**

- Ата-бабаларыбыҙ Рәсәйҙә беренсе булып үҙ республикаһын төҙөгән. Был уларға еңел бирелмәгән, күпме ҡан ҡойолған. Бүтәндәргә еңелерәк булған, сөнки башҡорттар республика төҙөгәс, уларға автоматик рәүештә ундай хоҡуҡ бирелгән. Беҙ Рәсәйҙә беренсе булғанбыҙ һәм беренсе булырға тейешбеҙ. "Беҙ яҡшыраҡ булдырабыҙ!" тине Башҡортостан Башлығы Радий Фәрит улы ла.

Һуңғы 8 йылда республикабыҙ күп йәһәттән артта ҡалды. Элегерәк беҙ алдараҡ бара инек. Беҙҙә хатта бер генә федераль юғары уҡыу йорто ла юҡ. Федераль юғары уҡыу йорто булмағас, йәштәр ситкә китә. Ошо мәсьәләне хәл итмәһәк, республикабыҙ алға китмәйәсәк. Мин хәҙерге йәштәргә нык ышанам. Улар белемле, тәртипле, маҡсатлы. Шул уҡ ваҡытта Мәскәүҙә, башҡа ҡалаларҙа йәштәребеҙ күп уҡый. Улар уҡыуын тамамлағас, беҙгә ҡайта алмай, сөнки эш урындары юҡ. Тимәк, эш урындары булдырыу ҙа кисекмәҫтән хәл итеүҙе талап иткән мәсьәлә.

Беҙҙең ауылдан Йосопов Илнур тигән егет компьютер буйынса бик ҙур белгес һанала. Мин уны ауылда ыштанһыҙ йөрөгән сағынан алып беләм. Беҙ әгәр ҙә ана шундай Илнур һымаҡ егеттәргә ярҙам итмәһәк, алдынғы була алмаясаҡбыҙ.

▸ **Балаларҙы тәрбиәләгәндә ниндәй кәңәш иң мөһиме тип уйлайһығыҙ?**

- Миңә атайым был һүҙҙәрҙе әйтмәне, әммә мин үҙ балаларыма "Һәр ваҡыт беренсе булығыҙ!" тием. Үҙем һәр ваҡыт яҡшыраҡ булырға тырыштым. Әрмелә хеҙмәт иткәндә спорт ярыштарында, политзаняиеларҙа һәр ваҡыт алдынғы була торғайным. Уҡыған саҡта ла, эшләгәндә лә шулай булдым. Бөгөн ҡыҙым да, улым да үҙ эшен ойоштороу уйы менән йәшәй. Хәҙерге йәштәр әгәр ҙә депутат, түрә булыуҙы ғына маҡсат итеп йәшәһә, иртәгә ул урындарҙан киткәс, эшһеҙ тороп ҡалалар бит. Әгәр ҙә үҙ эшеңде ойоштороһаң, ул һинеке буласаҡ, башҡаларға ла эш урындары барлыҡҡа килә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Был әңгәмәлә Зариф Закир улының Дәүләт Думаһындағы әлеге депутатлыҡ эшмәкәрлегенә әллә ни ҡағылманыҡ. Гәзитебеҙҙе уҡып барыусылар ул хаҡта хәбәрҙар, йәғни депутат булараҡ Зариф Закир улы матбуғат баҫмаларында ла, радио-телевидениела ла йыш сығыш яһай. Тимәк, һайлаусылары алдында яуап тота. Яуап тота икән, тимәк, уның эштәренең, хеҙмәтенең һөҙөмтәләре бар: һайлаусылары менән тығыҙ бәйләнеш тота, уларҙың аһ-зарын, проблемаларын ишетә, уларҙың ҡайһыларын закон рәүешендә, ҡайһыларын булған закондарға төҙәтмәләр, өҫтәмәләр индереү юлы менән тормошҡа ашырырға тырыша. Һәр хәлдә, һәр районда, ауылда бирелгән наказдар буйынса яуап тота ала ул. Юғарылағы әңгәмәнән аңлағанһығыҙҙыр: депутат булыу, етәксе булыу, ябай хеҙмәткәр булыу өсөн дә кешенең холҡонда яуаплылыҡ, намыҫлылыҡ, илһөйәрлек, илгәргә, атай-әсәйгә, туған халҡыңа һөйөү, тоғролоҡ кеүек сифаттарға эйә булыу кәрәк. Ә бындай сифаттарға Зариф Байғускаров тыуып-үҫкән ғаиләләге кеүек ғаиләләрҙә нигеҙ һалына.**

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ
әңгәмә ҡорҙо.

**Минең был көндәлегем - ҡағыҙҙа ла, йөрәктә лә, хыялда ла... Тормошомдо хисле һәм мәғәнәле иткән кешеләрҙең бик һирәктәре генә унда теркәлеп бара. Күңел күгемдәге йондоҙҙарым улар: Хәйерниса ҡәрсәйем, Миңлебаныу оләсәйем, инәйҙәрем Зәйнәб Биишева менән Фатима Мостафина, фәйләсүф ғалим-шағирҙар Әкрәм Бейеш, Рәйес Түләк... Уларҙы, илаһи һулыш эйәһенән башҡорт халҡының туған тел һәм рухи һыуһынын ҡандырырлыҡ йәшәү тыны алған заттар, тип, бергә тын алған кеүек хис итеп, яҡын күрҙем.**

**Был юлы һүҙем дуҫым Рәйес Түләк тураһында. Рәйес Ғосман улы 1959 йылда 14 октябрҙә Башҡортостандың Баймаҡ районы Буранбай ауылында тыуа. Ул - шағир, философ, даукәр йән. Беҙ униң менән һәр саҡ йә бәхәсләштек, йә көлөштөк... Ул ҡасандыр минең турала яҙырға теләне, ә миңә көтмәгәндә униң хаҡында яҙырға тура килде. Ун ике йыл, бер мөсәл дәүер элек, "Ах, минең яратҡан шағирым..." тип ҡәләмемдән ошо зар-мәдхиә түгелде... Мин ул яҙманы бер һөйләмен дә үҙгәртмәй ташҡа баҫтырмаҡ булдым. Йондоҙҙарымдың рухына сәмауи тәсбихем булһын.**

# ҠИССАИ-ТҮЛӘК



***02 апрель 2007 йыл. Күгәрсен районы.*** Әсәйем бик ауыр хәлдә ята. Мин ауылда уны ҡараған булам. Үкенес һәм йәлләү, хәҙерҙән үк әсәйҙе юҡһыныу һәм һағыныу... Әсәйем бер ҡалаҡ һыу ҙа йотмай... Телевидениела бергә эшләгән Ғәйнетдинов Юлай ағайға шылтыраттым, был аҙнала ла Өфөгә ҡайта алмайым, тинем. Ә ул миңә таң ла бер әрнеүле яңылыҡ әйтте: "Рәйес вафат булды". "Ҡайһы Рәйес?" "Рәйес Түләк. Иртәгә тыуған ауылына, Буранбайға оҙатабыҙ..."

Түләк... Яңыраҡ ҡына ул миңә шылтыратҡайны. Әҫәрҙәренде йыйып бир, мәкәлә яҙам, тине. Мин һинең алда бурыслы, тине. Ошо һүҙенә ғәрләндем. Бурыс ҡаплар өсөн генә йонсома, һинең хозурыңа лайыҡ әҫәрем юҡ әле, тинем. Ул унайһыҙланды, шаярттым, аңламаның, мин күптән һинең яҙғаныңды уҡығым килә, тине. Ә мин ҡылтайғайным инде. Кире-мире һөйләштем. Рәйес элек тә миңә бер нисә тапҡыр пьесаларымды һорап өндәште. Ул минең кемдән уҡытып, кемдән кәңәш һорарға белмәй интегеүемде һиҙгән кеүек, бер заман былай тине: "Бир миңә пьесаларыңды, анализ яһай беләм мин, бәлки, бер файҙам тейер..." Эх, Рәйес, һин шул тиклем кәрәк инең бит миңә. Тик һинең аҡылыңды, талантыңды һәм талабыңды мин бик юғары ҡуя инем, һиңә уҡырға ғына ла лайыҡ булырға тейешмен, тип һуҙҙым да һуҙҙым...

...Быуна һин юҡ. Өфөлә минең һинең кеүек дуҫым юҡ. Мин яратҡан, мине яратҡан бер яҡшы, изге күңелле кеше юҡ. Минең рухташым, классигым, шағирым юҡ. Белмәйем, был юғалтыуҙы беҙҙең башҡорт халҡы нисек кисерер...

Иң беренсе күргәндән һинең ипле, иғтибарлы, йомшаҡ күңелеңде яраттым, талантыңа иҫем китеп һоҡландым һәм гел һинең уңыштарың менән ғорурландым. Шиғырҙарың мөхәббәт хаҡында булһа, ҡатының ниндәй бәхетле, тип уйланым. Дуҫлыҡ хаҡында булһа, миңә арналғандыр кеүек ине. Һинең менән һөйләшеп-бәхәсләшеп туйырлыҡ түгел, әңгәмәләребеҙ гел ҡыҙыҡ һәм мауыҡтырғыс була. Бер-нисә көн буйы һинең һорауҙарыңа, яуаптарыңа, хистәреңә шаҡ ҡатып, уйланып йөрөй торғайным.

Гәзиттә мәҡәләң баҫылһа, шиғырың сыҡһа, йөрәгемде ихлас шатлыҡ ялмай. Матур фотоң да бирелһә, үҙеңде күргәндәй ҡыуанам. Нишләптер, бик яҡын булдың һин миңә. Шаянлығың, нескә юморың оҡшай торғайны. Бер блиц-интервьюла һиңә һорау бирәләр: "Иң яратҡан шөғөлөң нимә?" Яуабың иҫ киткес матур: "Таһир менән шахмат уйнау!" Таһир - һинең улың.

Белмәйем, кемгә нисектер, ә мин һинең һәр һүҙеңә, фекереңә һоҡлана һәм ҡыуана торған бер кешемен. Тик хәҙер һин юҡ. Был ҡыуаныс һағышҡа әйләнде...

***1986 йылдың көҙө.*** Беҙ танышҡанда һин өйләнмәгән егет инең. Ә мин өсөнсө балама ауырлымын. Аспирантураға уҡырға инергә имтихандар бирәбеҙ. Миңә ни ҡалғандыр, белмәйем, әммә уҡырға тигән теләгем һүрелмәгән булғандыр инде. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер урынға дүрт кешенән мин бер үҙем үтеп киттем. Һин ниндәйҙер имтиханға килеп тә тормаһың... Йәл, шул саҡта мин түгел, һин уҡырға ингән булһаңсы. Хәтеремдә, мин токсикоздан яфаланам, үҙем белдермәҫкә тырышам. Һин минең сытырайып һыҙланып ултырғаныма ғәжәпләнеп, йөҙөмә текәлеп-текәлеп ҡарайһың. Ниңә ауырыҡһынып ултырғыста ҡырын ҡына ултырғанымды аңлай алмайһың. Егет кешегә нимә тип аңлатайым, оялмайынса. Минең шул хәлдә аспирантура тип иҫәрләнеп йөрөүемә һин тамам аптырар инең.

***Икенсе осрашыу*** йәш драматургтарҙың тәүге семинарында, 1993 йылда булды. Етәксебеҙ Наил ағай Ғәйетбай семинаристар өсөн "Автомобилист" ял базаһын алған. Беҙҙе донъя мәшәҡәтенән, эштән айырып, шунда өс көн буйы драма серҙәренә өйрәтмәксе. Совет майҙанында автоклуб һымаҡ бер машинаға тыңҡыслап тултырҙылар ҙа елдерттек "драматургия иленә". Миңә ҡаршы бер аҙ һалмыш бер кеше ултыра. Йөҙө таныш, ҡылыҡтары ҡыҙыҡ, һүҙҙәре көлкө. Буранбай булып сыҡты ул. Йәш яҙыусылар конференцияһы көндәрендә (1993 йылдың мартында) БДУ-ның актовый залында шиғыр уҡығанын тыңлап, уға иҫем киткәйне.

*Алтын түгелмен мин,*
*баҡырмын.*
*Әммә тормош*
*шундай итеп йышты -*
*Алтын һымаҡ*
*оҙаҡ балҡырмын.*

Әле килеп ул ярым иҫерек хәлдә семинарға китеп бара, һәм мин уны танып еткермәйемгә һалышам, уны бик күптән белгәнемде һиҙҙермәйем. Рәйес беҙҙе таныштырҙы. Буранбай миңә һул ҡулын һуҙып: "Очень приятно икән, ти", - тине. Мин был һүҙгә сәмләнеп киттем, әммә белгертмәнем, шулай ҙа "бисәләрсә генә үс алдым" - Буранбайға бүтәнсә әйләнеп тә ҡараманым йәки бөтөнләй күрмәмешкә һалыштым. Униң бер ҡулы юҡ икәнен шунда күрҙем, әммә нишләптер Буранбайҙы йәлләп булмай ине. Буранбайға йә һоҡланып, йә нәфрәт менән генә ҡарарға мөмкин ине. Һоҡланыу - шиғырҙарына, нәфрәт - шиғыр яҙмағанына.

***Эй, Рәйес Түләк...*** Беҙ һинең менән бик борондан бер-беребеҙҙе беләбеҙ кеүек. Үҙгәртеп ҡороуҙар заманы. Бөтә нәмәгә талон. Һин Яҙыусылар союзында эшләйһең. Көтмәгәндә миңә шылтыратаһың. "Килеп сыҡ әле, бер эш бар". О, союз хәтле союзда мине иҫкә алһындар әле! Харап та мауыҡтырғыс тойолдо тәҡдимең. Союз мин йәшәгән йәтаҡҡа алыҫ түгел, барып та еттем. Ҡыуанып ҡаршы алдың да эшләп ултырған бүлмәңә алып индең. Мәйтәм, һәйбәт эш урыны, үҙеңә оҡшаһа, миңә оҡшай. "Эше яҡшы, аҡсаһы насар", - тиһең. Ғаиләң менән аҡса еткерә алмауыңды, ҡатының сирләгәнен һөйләнең. Мин бигүк иғтибар ҙа бирмәнем. Кем ауырымай ҙа кем шәбәймәй... Бүлмәлә тағы бер кеше бар ине. Униң алдында ҡыймай, мине коридорға саҡырҙың. Ҡулыңа ниндәйҙер бланкылар тотҡанһың. "Ҡарале, яҙыусылар халыҡ менән осрашыуға районлдарға сыға. Командировка һәм осрашыу өсөн аҡса алалар. Һин бит яҙышаһың, йәш яҙыусы булып иҫәпләнәһең. Нисә ҡарама, командировкалаһың. Табырлыҡ түгел. Мәктәптәр буйлап йөрөйһөң, уҡыусылар, уҡытыусыларҙы күрәһең. Ошо бланкыларға мисәт һуҡтырып алып ҡайт та, мин һиңә командировочный бирҙертермен..." Минең тәкәббәр һәм йәш саҡ - ундай нәмәнән уттан ҡурҡҡан кеүек ҡасам. Баш тарттым. Үҙемдең эшемдә лә командировочный алам мин, тим. Аптыраның, мөлдөрәп ҡарап ҡалдың...

Союзда күпмелер эшләп, баш ҡалала фатир яғы һис беленмәгәс, һин Сибайға ҡайтып киттең. Унда педучилищела, пединститута эшләгәнеңде ишетеп йөрөнөм. Дүрт бүлмәле фатир ҙа алған икән, тинеләр. Мин һинең өсөн шатлана инем.

***Көндәрҙән бер көндө*** шаҡлап минең эшкә килеп керҙең. "Тап әле кинокамера. Мин дәрес бирәм. Төшөр, тарих өсөн булһа ла төшөр. Бер ыңғайҙан минең ниндәй уҡытыусы икәнемде күрерһең..." Нисектер, камера табылды. Оператор Әмирханов ағай ине. Өфөлә, 1-се мәктәп-интернатта Рәшит Солтангәрәевтың "Һуңғы һунар" хикәйәһе буйынса һинең асыҡ дәресең була икән. "Минең әҙәбиәт уҡытыу буйынса әр-яңы методикам бар", - тиһең. Ул дәресте тулыһынса төшөрөп алдыҡ. Мин һинең илһамланып беренсе мәртәбә күргән балаларға дәрес биреүеңә, ифрат ҡыҙыҡлы итеп, тап үҙеңсә анализдар, логик фекерләүҙәр, фәһемле һығымталар менән башҡорт әҙәбиәтен өйрәтеүеңә һоҡланып та, ғәжәпләнеп тә ултырҙым. Иң ғәжәбе - уҡыусылар камераны ла онотоп, һиңә төбәлде, күҙҙәре янып, бәхетле асыш яһаған кеүек Рәшит Солтангәрәев ижадына мөкиббән инеп киттеләр...

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был видеотаҫмала тауыш яҙылыуан брак күп ине. Үҙең ғәйепле - беҙҙең мөмкинлеге сикләнгән бер бөртөк кенә камераны иҫәпкә алмайһың, ситкә боролаһың, ҡырға һөйләйһең... Шуға күрә дәресеңде байтаҡҡа ҡыҫҡартып, эфирға бирҙем. Һин аҙыраҡ үпкәләнең. "Улай буламыни, дәрес тулы булмағас, аңлашылмай ҙабаһа..." "Һуң, телевизион тапшырыу дәрес түгел бит", тип, һине берсә йыуатым, берсә туҡтаттым...

***Хәтереңдәме,*** бер йылды беҙ Талҡаҫта семинарҙа булдыҡ. Һин килмәнең. Эше бар, тинеләр. Семинар халҡы Сибайға спектакль ҡарарға килде. Автобус менән театр администрацияһы ҡаршыһына барып туҡтаныҡ. Ҡарайһам, афиша янында һин тораһың. Нимәгәләр борсолоп, кемделер көтәһең. Мин инде, һине күргәс, автобустан төшөргә булдым. Иҫәнләштек. "Нишләп семинарға килмәнең?" - тим. "Ҡатын ауырый", - тинең. "Улайһа, семинар ҡайғыһы юҡ һиндә. Дауала яҡшылап", - тип ғәҙәтемсә аҡыл өйрәтәм. "Их, мин дауалап ҡарайым ла бит, ул шәбәйергә уйламай шул..."

Шул саҡ театр директоры Дамир Ғәлимов пәйҙә булды, Рәйес уны көтҡән, ахыры, борсоулы сытырайып, ниҙер аңлата-аңлата ситкә киттеләр. Кем белә, ҡатынын дауаларға аҡса һорап йөрөгән ваҡыты булғандыр. Аҙаҡ ул бер аҙ беҙҙең менән автобуста ултырып барҙы. "Ана, минең йорт. Фатирым шәп тә ул, тик аҡса еткереп булмай..." - тине. Шунан ул төшөп ҡалды...

Мин униң артынан ҡарап ҡалып, байтаҡ уйланып, һағышланып барҙым. Ярата инем шул мин Рәйесте, Кеше булараҡ, Таһир тигән ғәжәп шәп малайҙың Атаһы, Флүрә тигән серле ҡатындың Ире һәм, бөтәһенән дә бигерәк, иҫ киткес талантлы Шағир, рухлы Гражданин, ихлас Дуҫым булғаны өсөн ярата инем.

Һуңғы арала уны иҫкә төшөрмәнем шикелле. Әсәйемдең ауырыуы, тормош мәшәҡәттәре етерлек булды. "Һинең алда бурыслымын" тип һөйләшеүҙән һуң бер аҙ һауаланып

✓ **Әлдә Рәйес Түләк үҙ ваҡытында йөрәген өтөп барған уй-яныуҙарын шиғри телгә һалып - ҡобайырҙар итеп беҙгә ҡалдырған. Әлдә Рәйес атлы егеткә башҡорт классигы булырҙай үткер телле батыр йөрәк насип булған.**



та, унан мәҡәлә яҙҙырырға баш тартыуым өсөн бер аҙ уңайһыҙланып та йөрөгәйнем. Ҡапыл ғына уның менән һөйләшкем килеп, трубканы алам да туҡтайым. Редакцияға ла шылтыратам, эштә юҡ, тиҙәр.

Рәйес, мин бит һиңә әллә нисә мәртәбә әйттем: үҙеңде һаҡла, һин - башҡорт шиғриәте классигы, һин - халҡыбыҙҙың иң киткес гәзиз балаһы!.. Һин шул йөрәкһеҙ һүҙҙәргә рәхәтләнеп көләһең. "Тағы әйт әле, тағы ҡабатла, мин ысынлап та шулаймы, һин ысынлап шулай уйлайһыңмы?" Мин ҡабатлайым, һиңә рәхәт булыуын теләйем. Күңелең күтәрелһен, ижадың асылһын, тим.

***Ә бер заман*** һин телецентр коридорында осраның. Ниндәйҙер радиотапшырыуҙа ҡатнашҡанһың, шул яҡтың корреспондент ҡыҙҙары менән йән-фарман атлап килә инең. Һәр ваҡыттағыса, мине күрһәң, мөләйем йылмайып ебәрәһең, бөтә күңелең менән асылаһың, хатта уңайһыҙ булып китә. Һине осратыу, ҡояшты күреү кеүек, яҡты һәм кинәнесле минуттар бүләк итә һәр саҡ. Күңелдә ҡыуаныс биләй. Шул коридорҙа ла һин мине туҡтаттың да, бик мөһим нәмә әйткәндәй, серле ҡиәфәт менән былай тинең: "Һинән улым булыуын теләйем. Табып бир миңә малай..." Ә мин берәй дорфа һүҙ менән нисек тә һинең күңелеңдә ҡыйыуҙан ҡурҡтым һәм етди итеп: "Йәл. Минең планда малай түгел, ҡыҙ табыу тора бит әле",- тип яуапланым. Ҡапыл ғына әйткән ошо һүҙ һиңә бик оҡшаны. Кинәнеп көлдөң. "Был хәтле оҫта яуап ҡайҙан башыңа килде, шәп әйттең бит. Рәхмәт. Маладис..." Ә мин тиҙерәк эргәңдән тайыу яғын ҡараным. Баяғы шарҡылдаҡ ҡыҙҙарға ла һин шул тәҡдимде әйткәнһең икән, уларҙың ни тип яуапларын белгең килгән... Хыялый шағир.

***Бер көн*** һин шылтыраттың. "Хәҙер килеп етәм, ваҡытың бармы?" Юҡ, тиергә ҡыйманым, бар, тинем. Үҙем һинең менән махсус осрашыу бығаса бер ҙә булмаған, бер аҙ тулҡынланам. Шунан мине "Батыр" кафеһына саҡырҙың. Икәү төшкө аш ашаныҡ. Ниндәйҙер мөһим йомошоң барҙыр бит, тип һораным. "Әйҙә минең менән Вьетнам баҙарына..."

Һин гонорар алғанһың, куртка кәрәк икән. Мине куртка ҡарашырға иптәшкә саҡыраһың, үҙең минән гәфү үтенәһең. Ә мин кинәнеп риза булдым. Елдерҙек баҙарға. Һиңә иң матур, иң крутой курткалар алып биргем килә. Тик аҡсаң самалы. Шағирҙың гонорары... Ике меңлекте һайланың, ҡара йәшел куртка. "Килешәме лә килешәме?.." Әлбиттә, килешә. Тик һин тағы ла шәберәк кейемдәр кейергә лайыҡһың. Шул саҡ һиңә Шәйехзада Бабич премияһын биргән саҡта төшкән фотоңдо гәзиттә күреп ҡыуанғанымды, шул тиклем матур, мөһабәт, һөйкөмлө ир-егет булып торғаныңды күреп ғорурланғанымды, һине нисек ҡотларға белмәй эҙләгәнемде, ап-аҡ костюмдарың менән төштә күргәнемде әйттем. Эй шатланған булдың шул ғына иғтибарыма.

***Икенсе бер юлы һыуыҡ февраль*** башында килдең. Алдан шылтыраттың. "Зинһар, урыныңда бул, миңә һине күрергә кәрәк..." Килдең. Кәйефең юҡ. Күп тә һөйләшмәйһең. Бүфетка төшөп сәй эскән булдыҡ. Шунан ғына әйттең. "Бөгөн Рәми ағайҙың тыуған көнө. Әйҙә, зыяратҡа барып киләйек". Мин аптырап ҡалдым. "Уның ҡәбере ҡай тирәлә икәнен беләһеңме һуң?" тим. "Беләм, табырбыҙ". Киттек мосолман зыяратына. Сатлама һыуыҡ. Беҙ ҡыҙышып атлайбыҙ, көн яҡтыһында тиҙерәк табырға кәрәк. Зыярат буйлап байтаҡ йөрөнөк. Ҡары көрәлгән юлдарҙан да, көрәлмәгәненән дә үттек, батып та бөттөк. Рәми ағайҙың ҡәберенә юл юҡ ине. Һин билдән ҡар йырып ҡәберҙе эҙләнең, йөҡә бирсәткә генә кейгән булғанһың, ҡулың өшөп, ышылдап, тын өрә-өрә бармаҡтарыңды йылыткан булаһың. Мин ҡайтырға ҡайыра башланым. Ә һин: "Әйҙә, ҡосаҡлашып йөрөйөк", тип бәйләнергә тотондоң. Ҡот осҡос, зыярат уртаһында, ҡәберҙәр араһында!.. Хоҙайым, әллә ниндәй гонаһлы булырһың! Хыялый шағирҙан башҡа кемдең уйына килһен бындай дыуамаллыҡ! Мин көләм, вәт шәп урын һәм шәп ваҡыт таптың. Ә һин етди итеп: "Белгең килһә, улар (әрүәхтар) беҙҙән көнләшә. Бер-беренән яратҡан ир менән ҡатынға ҡайҙа булһа ла ҡосаҡлашырға ярай, тиҙәр. Мин һине ҡосаҡламаһам, улар мине аңламаясаҡ". "Ҡуй, Рәйес, мин һинең өсөн яратҡан апай ғына, апайҙарҙы ҡосаҡламаһаң да була..." Шулай итеп, ни етди, ни хилаф шаярыу менән беҙ зыяраттан сыҡтыҡ. Һин бик моңһоу булып ҡайтып киттең.

Ҡатыныңдың ауырыу икәнен бик әрнеп һөйләй торғайның. Һөйләй тигәс тә, бәйнә-бәйнә түгел, бер-ике һүҙ менән әйтәһең дә, ауыр итеп көрһөнәһең... Һиңә ҡатын-ҡыҙ йылыһы ла кәрәк икәнен һиҙәм, тик минме һуң инде... Әйткәндәй, әллә нисә йылдар элек үк һин үҙең был һорауға яуап алып килдең. Яман ҡыҙыҡ хәбәр булды ул минең өсөн. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та, бер уйлаһың. Имеш, һин Наил ағай Гәйетбайға әйтә булаһың: "Сәрүәрҙе яратам". Ә ул нимә ти! "Кит, кеше Сәрүәрҙе яратамы?" "Эй асыу килде, дурак бит ул Наил ағай", - тиғән булдың. Шуны миңә килеп ысын итеп үҙең һөйләп торһаң бит әле. Бигерәк берҙәтлы ла, ихлас та кеше булдың инде, Түләккәй. Мин ғәжәпләнеүемдән ах-ух килеп көлдөм дә көлдөм. Ысынлап та, ҡалай мудрый кеше ул Гәйетбай... Үҙ балаларын, үҙ ирен ҡарарға ваҡыт тапмаған эшем әйәһе Сәрүәр ниндәй һөйәркә булһын инде... Бигерәк тә ни фатиры, ни аҡсаһы, ни машинаһы булмаған кешегә... Һинең хәбәреңде көләмәс итеп кешегә тараттым. Латыпов Сөләймәнгә лә һөйләнем, күҙе шар булды. Үҙем һөйләйем, үҙем Гәйетбайҙың раҫ әйткәненә эсем боша... Бына нисек бит ул донъя...

...Был донъяла һин юҡ инде, дуҫым. Бәхил бул. Ауыр тупраҡ баҫыр тәнеңде, бер Хоҙайым саҡырһын йәнеңде. Амин.

Ошо кистә Наил ағайға шылтыраттым. "Иртәгә Рәйесте оҙатабыҙ", тине ул. "Наил ағай, мин бара алмайым, әсәйем ауыр хәлдә. Һеҙ беләһегеҙ, мин уны ярата инем. Бик ярата инем. Әле лә яратам. Рәйескә шуны әйтегеҙ", тинем. "Ярай, әйтермен", тине Наил ағай..."

*02.04.2007.*

***Көндәлегемде быйыл 14 октябрҙә дауам иттем.*** Был юлдарҙы яҙғанға ун ике йыл да үтеп бара. Әсәйемһеҙ, Рәйесһеҙ ун ике йыл. Рәйес вафатынан һуң өс көн үткәс әсәйем дә мәңгелеккә китте бит...

Башҡорт шағиры, Шәйехзада Бабич исемендәге премия лауреаты Рәйес Түләккә 60 йәш тулыр ине. Иҫән сағында уның айырым бер китабы ла сыҡманы, бөгөн уның "Мең дә икенсе кис" шиғыр тупланмаһы тарихи баҫмаға әйләнде. Ҡатынына, Флүрә һылыу Түләковаға мең тапҡыр афарин - ифрат йылы иҫтәлектәр китабын, шиғырҙарын, мәҡәләләрен йыйып баҫтырҙы. Түләк һүҙе ҡағылғандар юғары исемдәр алды, Түләк утынан тоҡанғандар майҙан тотор ажар тапты, Түләк йөрәген алғандар ҡот тәнкәһе ҡапты. Рәйес Түләк исемендәге приз өсөн шиғри-әҙәби конкурстар йыш үтә. Тоғро дуҫтары уны онотмай, онота ла алмай - яйы сыҡҡан һайын Шағирҙы алға ҡуя. Түләкһеҙ беҙ йәшәй алмайбыҙ. Башҡорт йәштәре флешмоб менән шағирҙың әҫәрҙәрен ҡабатлай. Республика сәхнәләрендә гөрләп барған "Йөрәк һүҙе" бәйгеләрендә Рәйес Түләктең "Яныу" поэмаһы йәндәрҙе ялмарлыҡ шиғри ялҡындар үрләтә, беҙҙә әле майҙан тотоусы һәм еңеүсе туған телле йәштәр бар, рәхмәт яуғырҙары.

- Кем һин, Рәйес Түләк?

- Урал батыр ҡылысын алып, башҡорт йәнендәге быуаҙарҙы сапҡыслаған Шағир мин. Вата алдыммы-юҡмы ул ҡоршауҙарҙы, ләкин ҡылысын биреп торған батырыбыҙға рәхмәт уҡыйым. Һинең күңел күгендә балҡыған йондоҙҙарҙың береһе булғаныма кинәнәм, апай, ҡыуанам, ысын, биллаһи... Сөнки унда халҡым күңеленең бер ярсығы, тип өмөтләнәм.

Әлдә Рәйес Түләк үҙ ваҡытында йөрәген өтөп барған уйяныуҙарын шиғри телгә һалып - ҡобайырҙар итеп беҙгә ҡалдырған. Әлдә Ирәндек тауҙары арьяғында Һаҡмар һыуы буйында тыуып үҫкән Рәйес атлы егеткә башҡорт классигы булырҙай үткер телле батыр йөрәк насип булған, әлдә Хоҙай барса Төрки зар-тәғлимәт күгендә башҡорт ҡәүеме тарафынан Түләк йондоҙон ҡалҡытҡан. Беҙ шундай гәзиз йондоҙҙарыбыҙға ҡарап алға барабыҙ, юл табабыҙ, бер-беребеҙҙе танийбыҙ. Ян, Түләк йондоҙо!

**Сәрүәр СУРИНА.**

## БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ



# ӨФӨ ТУРАҺЫНДА НИҘӘР БЕЛӘҺЕҢ?

**Бала теле менән хәҡиҡәт һөйләнелә, тиҙәр. Ысынлап та, улар әле донъяға саф күҙҙәре менән бағып, ысынбарлыҡты нисек бар - шулай ҡабул итә, бөтөн нәмәнән ҡыуаныс һәм шатлыҡ таба белә. Ә бына улар баш ҡалабыҙ Өфө тураһында нимә белә, уны нисек күҙ алдына баҫтыра икән? Әйҙәгеҙ, фекерҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ.**

***Гүзәл Мостафина, Өфө районы Шамонин ауылы, 6 йәш:*** Өфөлә Салауат Юлаев бар, "Тамыр"ға барғанда гел күрәм. "Тамыр"ҙа беҙҙе телевизорға төшөрәләр, мин "Сәңгелдәк" тапшырыуында ҡатнашам. Тағы ла минең менән Азалия, Әминә, Искәндәр тигән дуҫтарым йөрөй. Өфөлә магазиндар бар: "Мега", "Планета". Мин "Планета"лағы аквапаркка барғаным бар. Өфөлә парктар күп. Мин парктарҙа йөрөп, балалар майҙансыҡтарында уйнап ҡайтам. Минең иң яратҡан урыным - ул Якутов паркы. Беҙгә унда барырға ла уңайлыраҡ. Тағы ла Өфөлә музейҙар бар. Мин Милли музейға барҙым, башҡорт биҙәүестәрен ҡараным. Шулай уҡ университеттар бар. Унда минең әсәйем менән Гөлиә апайым уҡыған. Йәйгеһен Ағизел йылғаһына һыу төшөргә йөрөйбөҙ. Өфөлә машиналар ныҡ күп. "Тамыр"ға барғанда гел дә тығынға эләгәбеҙ. Светофорҙар күп. Туҡтайһың да туҡтайһың. Ныҡ бейек өйҙәр бар. Минең Шамонинола, атай-әсәй эргәһендә генә йәшәгем килә. Беҙҙә светофорҙар ҙа, тығындар ҙа юҡ. Бында минең балалар баҡсаһы, яратҡан магазиным бар, дуҫтарым күп.

***Бәхтейәр Иштанов, Өфө районы Шамонин ауылы, 9 йәш:*** Өфө - Башҡортостандағы иң ҙур ҡала. Унда ҙур өйҙәр бар. Машиналар, кешеләр күп. Унда эш тә күп, шуға кешеләр эшкә йөрөйҙәр. Телецентрҙа әсәй эшләй. Өфөлә беҙҙең туғандар йәшәй. Ҡалала музейҙар бар. Өфө ҡышын матур, сөнки унда шыршылар ҡуялар, ҡараңғы төшһә, төрлө төҫтәрҙә гирляндалар яна. Йәйгеһен дә матур унда, фонтанда һыу инергә була.

***Баязит Иштанов, Өфө районы Шамонин ауылы, 7 йәш:*** Өфөлә атайҙың да эше бар. Атайҙың эше театрҙа. Уның эшендә концерт, театр ҡуялар. Беҙ унда утренникка барҙыҡ. Сысҡандар турaһында әкиәт ҡараныҡ. Ауылға ҡайтып барғанда ҙууур самолет күрҙек. Өфөгә самолеттар төшә. Өфөлә Искәндәр, Наҙгөл бар.

***Арина Ноғоманова, Бөрйән районы, 6 йәш:*** Өфө - ул ҙур Уфа! Мин унда атайым, әсәйем менән барҙым. Беҙ унда кино ҡараныҡ, циркка барҙыҡ. Унда үрмәксе-кеше күрҙек. Ул кешеләрҙе ҡотҡара. Өфөлә Салауат Юлаев бар. Ул һәйкәл. Ул да кешеләрҙе ҡотҡара. Ул ҙур атта ултыра. Эргәһендә гөлдәр-ағастар үҫә. Өфөлә өйҙәр бейек, машиналар күп. Таксиҙар ҙа бар. Унда тиҙ йөрөгән паровозик бар. Беҙ күҙәтеү тәгәрмәсендә йөрөнөк. Мин ҙурайғас Өфөлә уҡыйым да, әсәй кеүек аптекала эшләйем.

***Айнагөл Арыҫланбәкова, Күгәрсен районы, 4 йәш:*** Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы. Унда башҡорттар йәшәй. Минең Айнур ағайым да унда йәшәй, уҡый. Айнур ағай шунда йоҡлай. Ул студент. Зөлфирә инәй унда эшләй. Минең Өфөгә барғаным, ҡаласыҡҡа уйнағаным бар.

***Гүзәл Манапова, Булгаково биҫтәһе, 6 йәш:*** Өфө тау башында ултыра. Унда Хәбиров йәшәй. Ул - беҙҙең президент. Өфөлә балалар майҙансыҡтары, балалар булмәләре бик күп. Шулай уҡ парктар ҙа, статуялар ҙа, фонтандар ҙа күп. Өфөлә Салауат батырҙың һәйкәле бар. Мин уның эргәһендә йөрөргә яратам.

***Рамаҙан Йосопов, Өфө ҡалаһы, 9 йәш:*** Өфө тарихы борондан башлана. Был тирәлә Имән-ҡала булған. Ул әлеге Сәнғәт училищеһы тирәһендә торған. Юлдаш ағайым дуҫтары менән ул ҡаланы ҡаҙып сығарған. Бик күп боронғо әйберҙәр тапҡандар унда. Әле Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# МАНДАРИН ЯБЫҠТЫРА

■ Бөйөк Британия ғалимдары ни тиклем кеше олораҡ, ул шул тиклем аҙыраҡ йоҡлай, тип белдерә. Улар тикшеренеүҙәр ярҙамында түбәндәгеләрҙе асыҡлаған: 20 йәштән 30 йәшкә тиклемге йәш кешеләргә үҙен яҡшы тойоу өсөн тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡо кәрәк. 30-ҙан олораҡтарға 7 сәғәттән аҙыраҡ йоҡлау ҙа етә, ә унан да олораҡтарға тәүлегенә алты сәғәттән дә аҙыраҡ йоҡлау тап-таман. Тикшеренеүҙәр тағы ла шуны күрһәткән: кеше ни тиклем олораҡ, улар йоҡоһоҙлоҡтан яфалана, ә йәштәргә тәүгансы йоҡлау һирәк эләгә.

■ Табиптар, атеросклерозға килтерә, тип, йомортҡаны тыя ине, сөнки уның составында булған холестерин матдәләр алышыныуына насар тәьҫир итә. Әммә Америка ғалимдары быны кире ҡаға: тикшеренеүҙәргә ярашлы, көн һайын рационға йомортҡа индереү йөрәк тамырҙарына яҡшы тәьҫир итә.

■ Мандарин артыҡ ауырлыҡ менән көрәшергә ярҙам итә. Көньяҡ Корея ғалимдары был емештәрҙе тикшереп, уларҙың тәндә йыйылған майҙарҙан ҡотолорға булышлыҡ итеүен асыҡлаған. Эксперименттарҙа 60 мәктәп уҡыусыһы ҡатнашҡан. Уларҙы ике төркөмгә бүлеп, беренсе төркөмгә ике ай дауамында мандарин һуты биргәндәр. Тикшеренеү барышында ике төркөм дә физик күнекмәләр яһаған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, беренсе төркөм икенсе төркөмгә ҡарағанда 1,5 процентҡа күберәк ауырлыҡ юғалтҡан.

■ Инглиз ғалимдары сәйҙең яңы файҙалы үҙенсәлектәрен асыҡлаған. Бактиһән, сәй һөйәктәрҙе ныҡытырға ярҙам итә икән. Быны өсөн көнөнә бер нисә шәшке сәй эсеү ҙә етә. Белгестәр шулай уҡ ауыҙ ҡыуышлығын йәшел сәй менән сайҡатыу файҙалы икәнлеген белдерә. Йәшел сәйҙә булған фторид теш эмален боҙолоуҙан һаҡлай. Ә Америка ғалимдары көнөнә 4-5 шәшке йәшел сәй эсеү тире яман шешенән һаҡлауын асыҡлаған. Уның составындағы антиоксиданттар тирене ультрафиолеттан яҡшы һаҡлай.

■ Автомобиль газы менән бысранған һауа ғүмерҙе ҡыҫҡарта ала. Британия ғалимдары һанап сығарыуынса, ҡала халҡы йыл һайын уртаса 6 ай ғүмерен юғалта. Британияла бысраҡ һауа һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән йөрәк һәм үпкә сирҙәренән яҡынса 50 000 кеше үлә. Экологик комитет ағзаһы Джоан Валей был мәсьәләне тиҙ арала хәл итергә кәрәк, тип иҫәпләй. Билдәле булыуынса, машиналар PM10 тип аталған матдә йәки ҡаты өлөшсәләр бүлеп сығара. Британияның ҡайһы бер өлкәләрендә был өлөшсәләр күләме Евросоюз билдәләгән норманан күпкә юғары. Был өлөшсәләр респиратор системаһына һәм туҡымаларға үтеп инә һәм үпкә, йөрәк сирҙәре, астма барлыҡҡа килтерә. Ғалимдар бысраҡ һауаны хәҙер тәмәке төтөнөнә тиңләй. Тәмәке тартмаһа ла, даими рәүештә тәмәке төтөнө килтергән зыяндан үлеүселәр һаны бөтә донъяла 600 мең булһа, бысраҡ һауаның сәләмәтлеккә зыянын иҫәпләп бөтөп тә булмай, ти белгестәр. Шул уҡ ваҡытта Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, төтөн тәьҫиренән йөрәк сире килеп сыҡҡанлашып - 379 мең кеше, респиратор инфекцияларынан - 165 мең, астманан - 36 мең 900, үпкә яман сиренән 21 мең 400 кеше үлгән.

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

**Боролоп-боролоп ағып киткән Таналыҡ йылғаһы тауҙан-тауға бәрелеп иркен далаға атлыға. Тауҙар, йәшмә бүрекле Уралтау түбәләре оҙатып бара уны, гүйә, тоғро һаҡсы нөкәрҙәре ғәскәр башлығына эйәрә. Иҫ китмәле тәбиғәт ҡомарҡылары - ҡыҙыл йәшмә ҡаялар, йәшел йәшмә түбәләр ҡояшта емелдәй. Йылайыр-Баймаҡ юлынан көнсығыш яҡҡа йомолоп уҡтай тартыла тау юлы. Бына ул Байыштың һарыҡташлы тауҙары, Урғаҙа һыуының йәйрәп ятҡан ҡаҡ үҙәндәре. Әйткәндәй, урғаҙа, ороҡоҙоҡ, ҡороҡоҙоҡ, ҡорғаҙаҡ - бер тамырлы, бер мәғәнәле атамалар. Ер өҫтөнә оро-шар яһап бәреп сыҡҡан ҡеүәтле һыу башы булһа ла, бара-тора ҡоро үҙәнгә йөншишмә булыр гәзиз йылғалар улар.**

**Ишмөхәмәтов Илнур Мансур улы - Ишмөхәмәт ауыл советы башлығы әйтеүенсә, был ауыл биләмәһенә дүрт ауыл ҡарай: Ишмөхәмәт, Байыш, Манһыр, Байғаҙы. Совет власы дәүерендә Ленин орденлы "Йылайыр" совхоз-техникумы бүлексәләрендә меңдән ашыу кеше эшләй: һауынсылыҡ, малсылыҡ, игенселек, йылҡысылыҡ, ҡошсолоҡ менән танылған алдынғы хужалыҡтың илгә таралған даны әле һаман ҡолаҡта сыңлай. Бөгөн был тарафтарҙа икенсерәк ҡыңғырауҙар саң ҡаға: йәшмәле тауҙар аҡтарыла, тау түштәрен ярып карьерҙар соҡола, әүәлдән ҡалған шоссе юлдар ватылғандан ватыла, урыны менән ваҡ машина үткеһеҙ булып эре таштар аунай - улары юлаусы тәгәрмәсенә генә түгел, намыҫына ла урала, яр һала! Пайға таратылған совхоз ерҙәрен осһоҙ хаҡҡа ҡалын кеҫәле үткенселәргә һатҡан яҡташтарының башбаштаҡ ҡылығы өсөн кем яуап бирә? "Ике әсмуха сәйгә башҡорт ерен һатыу" ғәрлеге быуат башы һайын ҡабатланып торған бер сиргә әйләнә түгелме?**

# ЙӘШМӘ БАШЛЫ ТАУҘАР АРЪЯҒЫНДА

### Байғусҡаровҡа хат

Салт аяҙ ноябрь көнө Ишмөхәмәт ауыл советы биләмәһендә һәр кем күңеленән сәмәуи хат яҙҙы. Был сәләм хаттар Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Закир улы Байғусҡаровҡа төбәлгәйне. Уның килеүен төбәк халҡы алдан уҡ белде, һағайыулы ҡараш менән түҙемһеҙләнеп көтөп алды. Күптәр дәүләт вәкиле менән күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеү мөмкинлеге булыуға шатланды, сөнки республика етәкселегенә һорауҙар ҙа, уй-теләктәр ҙә етерлек. Халыҡ менән осрашыуҙан ҡурҡмаған, уны үҙ туған телендә тыңлаған һәм зарын ишеткән кешеләр хәҙер бик һирәк килә беҙгә, тиҙәр ауылда.

Депутаттың һүҙе "башҡорт башын ашаған йәшел аждаһанан" башланды. "Эскелек - беҙҙең милләт биленән баҫҡан бер упҡын булды, әле лә яһалма араҡы яһап, ошо афәтҡә илде һөйрәүсе ҡарайөрәктәр осрай, ауыл һайын тиерлек боҫоп-аңдып ята улар. Эскелек упҡынын йырып сыға алмаһаҡ, беҙҙең киләсәк шул ағыулы һаҙлыҡҡа батыуы мөмкин. Иҫерткес эсемлек яһап һатыусылар хәҙер өс мең түгел, утыҙ мең штраф менән "бүләкләнәсәк", - тине депутат. Факт - шаҡ ит! Депутат бер-нисә үткер миҫал әйтте: "Эскән ата-әсәнән тыуған балаларҙың 95 проценты ауырыу, дәүләт халыҡ сәләмәтлеге өсөн бүлгән аҡсаның 25 проценты (күп миллиардтар!) ошо эскелекте дауалау өсөн китә. Бөгөн илдә айныҡтыҡтар бөтөрөлдө. Айныткыс - күп кешене үлемдән алып ҡала, тимәк, күп ғиләне етемлектән ҡотҡара. Уларҙы яңынан тергеҙергә кәрәк". Залдағы кешеләрҙән дә тәҡдимдәр яңғыраны: "Ир-егетте эскелектән ҡурсалаған "Сафлыҡ", "Ант", "Ҡалҡан" кеүек халыҡ араһында һыналған ойошмаларға ла дәүләт яҡлауы-хуплауы кәрәк".

Зариф Байғусҡаров халыҡ хужалығы өсөн бик мөһим булған тағы бер мәсьәлә - урмандарҙағы ҡороған ағасты йыйыуға рөхсәт ителеүе тураһында һөйләне. Махсус түләү йәки ҡағыҙ кәрәкмәй, бер кем дә бер кемгә лә быны өсөн протокол төҙөргә тейеш түгел, тине ул. Ишмөхәмәттәр был йәһәттән үҙҙәре лә тәҡдимдәр еткерҙе: ағас алыусылар күбәйә, башбаштаҡлыҡ саманан ашҡан факттар бар, урманға күҙ-колаҡ һәм ысын хужалар кәрәк, эш урыны булдырыу мотлаҡ, тинеләр. Урманды ҡырҡып ситкә сығарыуға беҙ ҡырҡа ҡаршыбыҙ, үҙебеҙҙә эшкәртә торған цехтар, заманса ҡоролмалар бар һәм булһын, үҙебеҙ ағас эшкәртергә әҙербеҙ, тине ир-егеттәр.

Ауыл клубында депутат Байғусҡаровҡа һорауҙар ҡойон ямғыр кеүек яуҙы. Әлләә халыҡ тарафынан һайланған баш ҡала ҡунағының ихласлығы арбаны, әлләә ауыл Советы биләмәһе башлығының кешеләрҙе ауыр хәлгә төшөргән төп мәсьәләләрҙе ил башлыҡтары менән бергә генә хәл итеп булғанын аңлауы, һүҙ иркен ҡыҫмауы, кешене бүлдермәүе лә теләктәр һәм һорауҙар-үтенестәр ташҡынын тыя алманы...

Был төбәктә газ үтмәгән урындар бар, уныһы ла документ әҙерләп биреү шарттарына төртөлөп, нисәмә йылдарға һуҙылған бер баш ауырыуына әйләнгән. Мәҫәлән, Янғаҙы ауылында утыҙ йорт тора, алты фермер йәшәй, типовой клубта ремонт башланған да туҡтап ҡалған...

Иҫке Сибай мәктәбе быйыл мартта ябылып, балаларҙы Сибай ҡалаһына йөрөтөп уҡыталар. Балалар баҡсаһы ла бикле. Декабрҙә йылылыҡ селтәре буйынса экспертиза һөҙөмтәләре әҙер булһа, бәлки, асылыр, тиҙәр...

Ауыл Советтарына юлдарҙы таҙартыуға, урамдарҙы төндә яҡтыртыуға аҡса бүленмәйме, бүленеп тә килеп ет-



*Ҡарамалы-Ишмөхәмәттәр шулай ҡаршыланы ҡунаҡтарҙы.*



## БСТ
### 23 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

7.00 "Сәләм".
9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм.
10.00, 16.30 Т/с "Лабиринт". [16+]
11.00 Итоги недели (на рус. яз.).
11.45 "Специальный репортаж". [12+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).
14.30 "Бай". [12+]
15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
15.15 "Әлләсе". [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 "Ради добра". [6+]
18.15, 20.45 "Инцидент-репортаж". [12+]
19.00 "Вечерний телецентр".
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Дорожный патруль". [16+]
21.00 "Бизнес-обзор". [12+]
21.15 "Полезные новости". [12+]
22.00 "Тайм-аут". [12+]
23.00 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань).
2.00 Х/ф "Гардемарины, вперед!" Новости (на баш. яз.). [0+]
3.45 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]
5.15 "Орнамент". [6+]
5.30 "Наука 102". [12+]
6.00 "Историческая среда". [12+]

### 24 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 "Сәләм". [12+]
10.00, 16.30 Т/с "Лабиринт". [16+]
11.15 "Республика Live. #Дома". [12+]
11.45 "Дорожный патруль". [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).
14.30 "Дорога к храму". [0+]
15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
15.15 "Вопрос+Ответ=Портрет". [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 "Тайм-аут". [12+]
19.00 "Вечерний телецентр".
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Криминальный спектр". [16+]
20.45 "Полезные новости". [12+]
21.00 Уфимское "Времечко".
22.00 "Детей много не бывает". [0+]
23.00 "Колесо времени". [12+]
0.00 Х/ф "Гардемарины, вперед!" Новости (на баш. яз.). [0+]
1.45 Бәхетнамә. [12+]
2.45 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]
4.15 Автограф. [12+]
4.45 "Ете егет". [12+]
5.30 "Наука 102". [12+]

### 25 ДЕКАБРЯ СРЕДА

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 "Сәләм". [12+]
10.00, 16.30 Т/с "Лабиринт". [16+]
11.15 100 имен Башкортостана. [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).
14.30 "Аль-Фатиха". [12+]
15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
15.15 "Бала-сағa". [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 "Ты можешь!" [12+]
19.00 "Вечерний телецентр".
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Полезные новости". [12+]
20.45 "Честно говоря". [12+]
22.00, 6.00 "Историческая среда". [12+]
23.00 "Ете егет". [12+]
23.45 "Земляки". [12+]
0.00 Х/ф "Гардемарины, вперед!" Новости (на баш. яз.). [0+]
1.45 Бәхетнамә. [12+]
2.45 Спектакль "Эх, друг Байтимер..." [12+]
4.30 "Уфа. Живое". [12+]
5.15 "Орнамент". [6+]
5.30 "Наука 102". [12+]

### 26 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 "Сәләм". [12+]
10.00, 16.30 Т/с "Лабиринт". [16+]
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).
14.30, 5.15 "Земляки". [12+]
14.45 "Ради добра". [6+]
15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
15.15 "Бирешмә. Профи". [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 Учим башкирский язык. [12+]
18.15 "Инцидент-репортаж". [12+]
19.00 "Вечерний телецентр".
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Криминальный спектр". [16+]
20.45 "Главное - люди". Нефтекамской ЦРБ - 55 лет. [12+]
21.00 Уфимское "Времечко".
22.00 "Республика Live. #Дома". [12+]
23.00 "Песня года". [12+]
23.30 Автограф. [12+]
0.15 Х/ф "Гардемарины, вперед!" Новости (на баш. яз.). [0+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]
5.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
5.30 "Наука 102". [12+]

### 27 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 "Сәләм". [12+]
10.00 Д/ф "От Уфы до Хуаншаня". [6+]
11.15, 18.00 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00, 22.00, 6.00 "Точка Z". [12+]
12.30, 21.00 "Башҡорттар". [6+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Үткән ғүмер". [12+]
14.00 "Главное - люди". Нефтекамской ЦРБ - 55 лет. [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00 "Интервью".
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.15 "Гора новостей".
16.30 "Детей много не бывает". [0+]
17.00 "Моя планета Башкортостан". [12+]
17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
19.00 "Башҡорт йыры" представляет". [12+]
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Дорожный патруль". [16+]
20.45 "Инцидент-репортаж". [12+]
23.00 "Караоке по-башкирски". [12+]
23.30 "Уфа. Живое". [12+]
0.15 Х/ф "Виват, гардемарины!" Новости (на баш. яз.). [12+]
1.45 Спектакль "Кадриль". [12+]
3.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]
3.30 Х/ф "Виват, гардемарины!" [12+]
4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]
5.45 "Земляки". [12+]

### 28 ДЕКАБРЯ СУББОТА

7.00 "Доброе утро!" [12+]
8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Аль-Фатиха". [12+]
8.45 "Ты можешь!" [12+]
9.15 "Посмотрим". [6+]
10.00 "Физра". [6+]
10.15 "Преград.net". [6+]
10.30 "Книга сказок". [0+]
10.45 "Тамыр селтәре". [6+]
11.15 "Байтус". [6+]
11.30 "Территория роста". [6+]
12.00 "Күстәнәс". [12+]
12.30 "Ете егет". [12+]
13.15 "Земляки". [12+]
13.30 "Хазина о Хазине". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 "Колесо времени". [12+]
17.00 Х/ф "Салават Юлаев". [12+]
19.00 "Вопрос+Ответ=Портрет". [6+]
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.00 Осторожно, дорога! [12+]
20.15 "Ради добра". [6+]
20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 "Караоке по-башкирски". [12+]
22.30, 1.00 Итоги недели (на баш. яз.).
23.15 "Башҡорт йыры" представляет". [12+]
0.00, 3.45 Х/ф "Виват, гардемарины!" [12+]
1.45 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!" [12+]
4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]
5.45 Д/ф "От Уфы до Хуаншаня". [6+]

### 29 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Бай". [12+]
9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Бейе". [0+]
10.15 "АйТекә!" [6+]
10.30 "Детей много не бывает". [0+]
11.00 "Сулпылар". [0+]
11.30 "Гора новостей". [6+]
11.45 "Бирешмә. Профи". [12+]
12.30 Итоги недели (на баш. яз.).
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.30 "Башҡорттар". [6+]
16.00 "Дорога к храму". [0+]
16.30, 5.30 "Историческая среда". [12+]
17.00 Концерт. [12+]
18.00 "Полезные новости". [12+]
18.15 "Тайм-аут". [12+]
18.30 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]
18.45 "Лидеры региона". [12+]
19.45 "Әлләсе". [12+]
20.30 "Теге өсәү!" [12+]
21.00, 22.30 "Республика Live. #Дома". [12+]
21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15, 6.45 "Специальный репортаж". [12+]
22.45 "Красная кнопка". [16+]
23.30 "Байыҡ" представляет... [12+]
0.30, 3.45 Х/ф "Виват, гардемарины!" [12+]
1.30 Спектакль "Дачники". [12+]
4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]


ЭТО ПОЛЕЗНО ЗНАТЬ

# Обогреватель с эффектом горячего кирпича

## Современный вариант русской печи от завода "ТеплЭко"




**В старину русская печь занимала половину избы, требовала внимания и заботы, а за отдаваемое тепло заставляла человека поработать. Зато в доме всегда было тепло и комфортно. Современная система центрального отопления избавила нас от необходимости растапливать печь и подкидывать дрова, но многие все же не отказались бы обзавестись хотя бы "буржуйкой".**

Что ж, мечты сбываются! Не "буржуйкой", а целой русской печью сегодня может обзавестись каждый, при этом займет новая печь всего *около одного квадратного метра на стене*, не потребует дров и вообще какого-либо внимания, ее всего лишь надо включить в розетку.

Речь идет об экономичном обогревателе **"ТеплЭко"**, который сочетает в себе теплоносные характеристики кирпича русской печки и современные технологии, сделавшие его компактным и экономным.

### МЕЧТЫ О ТЕПЛЕ

Во многих квартирах батареи то греют, то не греют. Если в мае квартирную "печку" можно отключить, в сентябре ее не включишь, так как отопительный сезон еще не начался. А еще иногда батареи засоряются... А еще падает давление в системе... А еще... Да мало ли отговорок мы слышали о том, почему в квартире вдруг становится холодно. Послушав о причинах похолодания, мы достаём обогреватели, какие у кого есть: масляные, тепловентиляторы, калориферы. Одни сушат воздух, другие угрожают пожаром, к третьим нельзя подпускать детей. В общем, мороки с ними не меньше, чем с громадной русской печью. При этом они еще крайне "прожорливы": счет за электроэнергию лучше оплачивать с закрытыми глазами!



Обогреватель **"ТеплЭко"** разом решает все эти проблемы. Он представляет собой декоративную панель, внутри которой спрятан хромоникелевый нагреватель, залитый составом из кварцевого песка. **"ТеплЭко"** можно использовать, как отдельно, так и создавать отопительные системы - количество обогревателей зависит от площади. Один обогреватель устанавливается на 9 квадратных метров, при условии стандартной высоты потолков. До требуемой температуры такая панель нагревается за 10-15 минут, а остывает, как плотная кирпичная стена - несколько часов.

**"ТеплЭко"** не сушит воздух, не сжигает кислород, пожаробезопасен (так как поверхность не нагревается более чем до 98 градусов) и в четыре раза экономнее обычного чайника (даже за сутки работы одна панель потребляет всего 2,5 кВт при использовании терморегулятора). Номинальная мощность обогревателя: 400 Вт, размер: 600 мм*350мм*25мм, вес: 12 кг.

### ВЛИЯНИЕ НА ЗДОРОВЬЕ ЧЕЛОВЕКА

Тепло - это инфракрасные лучи, но не все из них безопасны для человека, только те, которые находятся в диапазоне излучения человеческого тела - от 6 до 20 мкм. Внешнее излучение с такими длинами волн наш организм воспринимает как своё собственное и интенсивно его поглощает. За счет этого в организме активизируется микроциркуляция крови, ускоряется метаболизм, улучшается самочувствие, исчезает усталость. Природный источник длинноволновых инфракрасных лучей - это солнце, а бытовой - русская печь, излучающая тепло, комфортное для организма. Обогреватели **"ТеплЭко"** используют естественные свойства кварцевого песка накапливать тепло, а затем долгое время отдавать его в длинноволновом инфракрасном диапазоне по принципу горячего кирпича. В отличие от всех других обогревателей, **"ТеплЭко"** не только безвреден, но и оказывает благотворное влияние на здоровье человека.

### САМОСТОЯТЕЛЬНЫЙ И НАДЁЖНЫЙ

Главное преимущество обогревателя **"ТеплЭко"** - его самостоятельность. Оптимальную температуру, которую он должен поддерживать в комнате, можно задать с помощью терморегулятора. *И все. Он будет работать, создавая атмосферу настоящего домашнего, "обжитого" уюта - когда можно играть с детьми на полу, спокойно спать, ворочаясь и раскрываясь, какие бы морозы ни трещали за окнами.* Еще обогреватель **"ТеплЭко"** идеально подходит для дачи, гаража и офиса. Несколько обогревателей способны полностью заменить центральное теплоснабжение.

Завод **"ТеплЭко"** является единственным в России производителем энергосберегающих обогревателей из кварцевого песка высокой степени очистки. Купить обогреватель вы можете в нашем фирменном магазине или заказать доставку по телефону. А для установки обогревателя потребуется минимум сил и сноровки, три самореза и отвертка.

И пусть простота обогревателя не вызывает никаких сомнений в его долговечности. Как известно, все гениальное устроено довольно просто. И обогреватель **"ТеплЭко"** может работать практически вечно, ведь его нагревательные элементы не контактируют с воздухом и не окисляются. Гарантия пожизненная*.

**ЭКОНОМИЧНЫЙ** 2-3,5 кВт в сутки при использовании терморегулятора
**БОЛЬШОЙ СРОК СЛУЖБЫ** Пожизненная гарантия*
**БЕЗОПАСНЫЙ** 100% пожаробезопасность
**КОМФОРТНЫЙ** Не сушит воздух, не сжигает кислород
**ПРОСТОЙ В УСТАНОВКЕ** Справится любой хозяин дома
**ЭКОЛОГИЧНЫЙ** Наша продукция соответствует санитарным требованиям
**ПОЛЕЗНЫЙ ДЛЯ ЗДОРОВЬЯ** Улучшает самочувствие, исчезает усталость

СДЕЛАНО В РОССИИ
Подтверждено европейское качество
CE

ТЕПЛЭКО

Единственный фирменный магазин компании "ТеплЭко" в Уфе расположен по адресу:
**ул. Конституции, 2. Время работы: пн. - суб. с 10 до 20 часов без обеда, воскресенье - выходной. Тел.: (347)214-93-08, (964) 956-23-00, 8 800 333 05 35 (звонок бесплатный по России)**
ОСТЕРЕГАЙТЕСЬ ПОДДЕЛОК!
tepleko.ru
ОГРН 1177847333993. *Срок эксплуатации 10 лет.
На правах рекламы.

***✓ Кешелектең мөмкинлектәре сикһеҙ булыр ине, әгәр ҙә ул сикләнгәндәр власын сикләй алһа...***

***(Габриэль Лауб).***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ДЕКАБРҘӘ ТЫУҒАН ШӘХЕСТӘР




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**24-27 декабрь** сәғәт 10.00, 12.00, 14.00 **"Үҙ йөрәгеңде тыңла"** (Х. Шәмсетдинов, Г.-Х. Андерсен әҫәре буйынса), әкиәт. 0+

**27 декабрь Премьера "Гөлбостан"** (Ҡ. Даян, Д. Йосопов инсц.) 12+

**28 декабр**ь сәғәт 11.00, 13.00, 15.00; **30 декабрь** сәғәт 10.00, 12.00 **"Үҙ йөрәгеңде тыңла"** (Х. Шәмсетдинов, Г.-Х. Андерсен әҫәре буйынса), әкиәт. 0+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23, 24, 26 декабрь** сәғәт 10.30, 12.00, 14.30; **28 декабрь** сәғәт 12.00, 14.30, 16.00 балалар өсөн **"Новогодний переворот"** Яңы йыл әкиәте күрһәтелә. 0+

**23, 24, 26 декабрь** сәғәт 10.00, 12.30, 15.00; **28 декабрь** сәғәт 12.00, 12.30, 14.30, 15.00, 16.00, 17.00 **"Айболит и Бармалей"** Яңы йыл әкиәте. 0+

**25 декабрь** сәғәт 10.00, 12.30, 15.00; **29 декабрь** 12.30, 15.00 **"Щелкунчик"** (Нина Соболева, Э.Т.А. Гофман әкиәте буйынса), музыкаль әкиәт. 0+

**25 декабрь** сәғәт 10.30, 12.00, 14.30; 27, **30 декабрь** сәғәт 10.30, 12.00; **29 декабрь** сәғәт 12.00, 14.30, 16.00 **"Сундучок Деда Мороза"** (Д. Голубецкий), Яңы йыл әкиәте. 0+

**27 декабрь** сәғәт 10.00, 12.30, 15.00 **"Синяя птица"** Раштыуа әкиәте (М. Метерлинк) 6+

**30 декабрь** 12.00, 15.00 **"Алые паруса"** (А. Решетникова, А. Грин повесы буйынса), романтик фантазия. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**28-30 декабрь** сәғәт 11.00, 14.00, 17.00; **31 декабрь** сәғәт 11.00 **"Приключения белых мышей"** (С. Чураева), Яңы йыл спектакле. 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**28-29 декабрь** сәғәт 11.00, 13.00, 15.00; **24-27 декабрь** сәғәт 11.00, 13.00 **"Путешествие в мир сказок"** Өфөнөң Яңы йыл утренниги. 0+

**29 декабрь "Baby-ёлка"**, 3 йәшкә тиклемге балалы ғаиләләр өсөн Яңы йыл байрамы. 17.00 0+

**50-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Катод. Катанов. Туған. Алтай. Эркет. Әүелкәй. Арыҫлан. Әкиәт. Елпәҙә. Иваси. Оло. Хөрмә. Ваба. Игәт. Лөғәт. Лапы. Турыҡай. Ҡалым. Рамаҙан. Абевега.

**Вертикаль буйынса:** Амнистия. Айыуханов. Лабиринт. Каса. Умарта. Йәнеш. Катет. Оят. Ҡулаев. Ғәлләмов. Айова. Диван. Эйә. Халыҡ. Көбө. Әләм. Тут. Әйтем.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабиғел ахыр - Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (26) дүшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 24 (27) шишәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 25 (28) шаршамбы | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 26 (29) кесе йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 27 (1) йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |
| 28 (2) шәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |
| 29 (3) йәкшәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

## ГЛИЦЕРИНМЫ?



**Сиропҡа оҡшаған төҫһеҙ, үтә күренмәле был шыйыҡса һәр аптекала һатыла, тик ул һаулыҡ һаҡлау өлкәһенән тыш та: кулинарияла, косметологияла, ауыл хужалығы, хатта хәрби сәнәғәт өлкәләрендә лә киң ҡулланыла. Һүҙ глицерин хаҡында. Беҙ уны көнкүрештә нисек файҙаланып булыуы тураһында һөйләмәксебеҙ.**

Һеҙ уның өйөгөҙҙә лә яҡшы ярҙамсы була алыуы тураһында, бәлки, белмәйһегеҙҙер ҙә. Йортоғоҙҙа мөмкин тиклем зарары аҙыраҡ булған таҙартыу сараларын ҡулланырға тырышығыҙ. Ҡулланыуҙа бик ябай һәм үҙе арзанлы ғына әлеге глицерин ярҙамында кейемдәге таптарҙы бөтөрөргә була. Еләкемештән ҡалған таптарҙан таҙартыу өсөн әйберҙе 1 сәғәт глицеринда тотоп алғас, аҙаҡ еңелсә тоҙло һыуҙа сайҡатырға. Сәй һәм кофе эҙҙәрен аш тоҙо менән глицерин ҡушымтаһы бөтөрә.

Глицерин туҙандан да ҡотолоу сараһы. Лаклы ялтырауыҡ әйберҙәр өҫтөн һәм көҙгөнө глицерин менән һөртөргә генә кәрәк - унда башҡаса туҙан бөртөгө күрмәҫһегеҙ. Һыуға бер аҙ глицерин ҡушып йыуһағыҙ, ламинат һәм паркет иҙәндәрегеҙ ҙә ялтырап ятасаҡ.

Ләкин глицеринды таҙартыу-йыйыштырыу эштәрендә генә түгел, өй шарттарында косметологияла ҡулланыу ҙа бик файҙалы. Шампунға бер-ике тамсы глицерин өҫтәп ебәрһәгеҙ, сәстәрегеҙ ялтырап китәсәк, уның дымландырыу үҙенсәлеге лә бар. Ҡулдарҙың тиреһе ҡоро булып, ярғыланып торһа ла ошо аптека сараһы ярҙамға килер: уны бер аҙ ҡулға һөртә торған кремға өҫтәргә, ҡулдарҙы глицеринлы һыуға тығып ултырырға йә туранан-тура ҡулға һөртөргә мөмкин.

Тағы бер кәңәш: 10 капсула Е витаминын шприцҡа һурҙырып, уны 25 грамлыҡ шешәләге глицеринға ҡушырға һәм кис сериал ҡарағанда, битегеҙгә ошо ҡушымтанан маска эшләргә. 40-60 минуттан битегеҙҙе йыумағыҙ, ә йомшаҡ салфетка менән һөртөп кенә алығыҙ ҙа йоҡларға ятығыҙ. Бер аҙнанан бит тирегеҙҙе танымаҫһығыҙ ҙа.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАШҠОРТСА ЯҠШЫРАҠ БЕЛӘЙЕК!

**"Русса уҡып-яҙып ҡына түгел белмәк, Хәл килһә, француҙса белгән яҡшы", - тип яҙғанда бөйөк мәғрифәтсе-шағирыбыҙ Мифтахетдин Аҡмулла бер мәл милләттәштәренә туған телде өйрәтер өсөн дә шул рәүешле саҡырыуҙар ташларға кәрәк булыр, тип уйланымы икән? Әммә бына быуат ярым тирәһе ваҡыт үтеү менән тап уның тыуған көнө - 14 декабрь "Башҡорт теле көнө" тип иғлан ителде һәм байрам сараларының һәр береһендә, туған башҡорт телебеҙҙе белергә кәрәк, тигән һүҙҙәр яңғыраны.**

Өфөләге Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге һәйкәлгә сәскәләр һалыу менән башланып киткән байрам артабан уның исемен йөрөткән Башҡорт дәүләт педагогия университетында бөтә республика халҡы өсөн тура эфирҙа башҡорт теленән асыҡ дәрес үткәреп дауам итте. Дәрес ҡараусылар башҡорт теленең үҙенсәлекле лексикаһы менән танышты, башҡортса һөйләмдәрҙе башҡа төрки телдәренә тәржемә итеп, туғандаш ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, татар телдәрен дә аңлауы еңел булыуына төшөндө, урыҫ һәм башҡорт телендәге үҙләштерелгән һүҙҙәр, диалекттар тураһында ла мәғлүмәт алды. Яҙыусылар союзы рәйесе Зәки Арыҫланов һәм М. Аҡмулла исемендәге БДПУ ректоры Салауат Сәғитов башҡортса иң оҙон һүҙҙәрҙе тиҙ әйтеп, ярышып та ҡараны хатта. Башҡортса аңлаған ҡатнашыусыларҙы ғына түгел, башҡа милләт кешеләрен дә телебеҙҙә 29 хәрефлек һүҙ барлығы хайран итте.

- Башҡортостан Автономияһының 100 йыллығын билдәләгән осорҙа башҡорт телен үҫтереү менән бәйле мәсьәләләр V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, Бөтә Рәсәй башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының съезында ҡаралғайны. Унда күтәрелгән тәҡдимдәр, фекерҙәр ташҡа баҫылған көйө генә ҡалманы, дәүләт власть органдары ла, ижтимағи ойошмалар ҙа, йәмәғәтселек тә был тәҡдимдәрҙе тормошҡа ашырыу буйынса эҙмә-эҙлекле эш алып бара, бөгөнгө был ваҡиға ла ошо эшмәкәрлектең сағыу бер миҫалы, - тине БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Фәнүр Йәғәфәров сарала сығыш яһап. - Башҡортостан Башлығы Радий Фәрит улы Хәбиров республикабыҙҙа Башҡорт теле көнөн билдәләү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Мин һеҙҙе ошо байрам менән ихлас күңелдән ҡотлайым. Бөгөнгө форсаттан файҙаланып, бер генә фекер: быуаттар аманаты, ата-бабалар васыяты булып беҙҙең быуынға килеп еткән, беҙгә тапшырылған ҡәҙерле телебеҙҙе күҙ ҡараһындай һаҡлайыҡ. Уның бар байлығын түкмәй-сәсмәй, арттырып, киләһе быуындарға тапшырайыҡ!

Башҡорт теле көнө саралары баш ҡаланың "Ultra", "Мега", "Башҡортостан", "Үҙәк баҙар" сауҙа үҙәктәрендә балалар һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн мауыҡтырғыс башҡорт уйындары, башҡорт йыр-бейеүе буйынса оҫталыҡ дәрестәре, яңы йәнһүрәттәр күрһәтеү һәм башҡа ҡыҙыҡлы тамашалар менән дауам итте. Ойоштороусыларҙың береһе, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды директоры Гөлназ Йосопова әйтеүенсә, былар барыһы ла республикала йәшәгән башҡа милләт вәкилдәрен туған телебеҙ, мәҙәниәтебеҙ менән яҡынданыраҡ таныштырыу, ҡыҙыҡһындырыу, уйын формаһындағы еңел дәрестәр аша телде өйрәтеү, популярлаштырыу маҡсатында эшләнә. Әйткәндәй, Фонд әлеге көндә башҡорт балалар баҡсалары өсөн методик ҡулланмалар сығарған, балалар өсөн кеҫә телефоны уйындары, махсус ҡушымталар эшләгән, ә киләсәктә башҡорт телен цифрлаштырыуға йүнәлтелгән проекттарҙы тормошҡа ашырырға ниәтләй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт теле көнөн билдәләһәк тә, был йыйылына бер мәртәбә генә уны хәтергә төшөрөү тигәнде аңлатмай. Быға дәлил итеп ошо миҫалды килтереү ҙә етә: ошо байрам саралары сиктәрендә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты киләһе 2020 йылды Башҡорт теле йылы итеп үткәреү тураһында сығыш яһаны. Ҡоролтай ағзалары менән "Торатау" конгресс-холлында үткәрелгән эшлекле осрашыуҙа республика Башлығы Радий Хәбиров был тәҡдимде ыңғай ҡабул итте. Шуға күрә, киләсәктә үҙ башҡорттарыбыҙға "Туған телде өйрәнәйек!" һәм "Туған телдә һөйләшәйек!" тигән саҡырыуҙар талап ителмәҫ, тип тә өмөт бағлайбыҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АФАРИН!




# ЙӘНҺҮРӘТ ҮҘЕБЕҘСӘ ҺӨЙЛӘШӘ

**Өфөнөң "Родина" кинотеатрында яңы BALALAR проекты сиктәрендә кескәйҙәр өсөн башҡорт телендәге үҫтереүсе йәнһүрәттәр серияһынан беренсе йәнһүрәт күрһәтелде. Уның темаһы - "Төҫтәр һәм йыл миҙгелдәре". Проект республика Башлығы грантына ғәмәлгә ашырылған.**

Премьера уңайынан кинотеатр холында Урал батыр һәм Айһылыу ҡатнашлығында мауыҡтырғыс уйындар, бейеүҙәр, шулай уҡ һабын ҡыуыҡтары шоуы, аквагрим менән балалар байрамы ойошторолдо. Һәр бала бүләккә йәнһүрәт геройҙары менән йәбештергестәр һәм шарҙар алды. Кинотеатрҙың ҡыҙыл залы туп-тулы ине. Премьераға ата-әсәләр туғыҙ айҙан биш йәшкәсә балалары менән килгән. Йәнһүрәттәр тап ошо йәштәге балалар өсөн төшөрөлгән. BALALAR проекты кескәйҙәрҙе туған тел мөхитендә үҫтереүгә йүнәлтелгән. Премьеранан һуң проекттың ижади төркөмө ҡатнашлығында сессия уҙҙы. Проект инициаторҙары һәм етәкселәре - Рузилә һәм Илдар Кинйәбулатовтар; проекттың pr-менеджеры Фатима Янбаева; йәнһүрәттең төп геройҙарын тауышландырған балалар: Бесәй - Азалия Ҡолөхмәтова, Төлкө - Йәмилә Хисаметдинова, Бүре - Искәндәр Мөхәмәтйәнов, Айыу - Илназар Әхмәтйәнов. Проектты ойоштороусылар әйтеүенсә, биш үҫтереүсе йәнһүрәт, ике мобиль ҡушымта, үҫтереүсе онлайн һәм офлайн карточкалар, әлифба һәм балалар өсөн башҡа әсбаптар сығарыу күҙаллана. Уларҙың барыһы ла balalar.org порталында туплана. "Өлкәндәр һәм олораҡ балалар өсөн өҫтәл уйынын булдырырға уйлайбыҙ. Был Scrubble уйынының башҡортса аналогы була", - тип хәбәр итте проект авторы һәм етәксеһе Рузилә Кинйәбулатова.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠЫУЫШЫН ЯНДЫМЫ?

## Хоҙай мәрхәмәте яҡындыр...

Яҡшынан яҡшы тыуыуы - ғәҙәт, яҡшынан яман тыуыуы - ғәжәп.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Фәрештәләй түҙем булыу өсөн аждаһаныҡы кеүек көс кәрәк.

**(Александр Кумор).**

Ҡатын-ҡыҙ ир-егеттең үҙе өсөн ни эшләгәнен күрмәһә лә, уның өсөн нимә эшләмәгәнен шунда уҡ шәйләй.

**(Жорж Куртелин).**

Балалары һәм... әбейҙәре матур булған милләттең ҡаны затлы иҫәпләнә.

**(Григорий Ландау).**

Кешелектең мөмкинлектәре сикһеҙ булыр ине, әгәр ҙә ул сикләнгәндәр власын сикләй алһа...

**(Габриэль Лауб).**

Яратылыу - ҡайһы саҡта яҙа. Яратағлармы һине, юҡмы икәнде белмәү - икеләтә яҙа...

**(Роберт Лембке).**

Сәйәсәттә, грамматикалағы кеүек, барыһы ла бергә ебәргән хатаны ҡағиҙә итеп алалар.

**(Андре Мальро).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Корабль һәләкәткә осрай һәм берҙән-бер кеше генә ҡотолоп ҡала. Уны тулҡын тере йән булмаған утрауға алып барып ташлай. Кеше туҡтауһыҙ Аллаға ялбара, үҙе ҡотҡарыусылар килмәйме икән, тип, әленән-әле океанға күҙ һала. Былай ултырып арый һәм һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөүсе бүрәнәләрҙе йыйып, үҙенә бәләкәй генә ҡыуыш ҡороп ала. Ләкин берҙән-бер көндө утрау буйлап ашарлыҡ рияыҡ эҙләп йөрөп ҡайтһа, ҡыуышын ут ялмаған ялмап алған. Кеше ҡайғыға ҡала, асыуланып, илап, күккә ҡарап ҡысҡыра: "Аллам, ниңә мине былай язалаға булдың?"**

**Иртән кеше ярға яҡынлашыусы корабль тауышына уянып китә. "Һеҙ мине нисек эҙләп таптығыҙ?"- ти ул ҡотҡарыусыларына. "Беҙ һинең ут яғып, сигнал биреүеңде шәйләп ҡалдыҡ", - ти ҡотҡарыусылар...**

**Әйләнә-тирәлә барыһы ла насар булғанда күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүе бик еңел ул. Ләкин нисек кенә ауыр булғанда ла Хоҙай беҙҙең менән бергә икәненә ышанырға кәрәк. Шуны бел: әгәр ҙә һинең бәләкәй генә ҡыуышың янып китә икән, бының Хоҙай мәрхәмәтен саҡырыусы сигнал булыуы ла ихтимал бит.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
20 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 2544/12